ПОБЕДА! 70 ЛЕТ

*Миләүшә ҠОЛМӨХӘМӘТОВА*

# *Һуғыш уты ҡабынмаһын...*

*Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға етмеш йыл тулһа ла, һуғыш темаһы беҙҙе генә түгел, киләһе быуындарҙы ла тулҡынландырасаҡ әле. Яҙмамдың төп геройы — элекке берҙәм Чехословакияла киң билдәле шәхес, Башҡортостан ҡаһарманы Даян Фәтхелбаян улы Мурзин. Бөгөнгө Чехияла һәм Словакияла тарихты боҙоп күрһәтеү, үҙҙәрен фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарған илебеҙҙең исемен телгә алмаҫҡа, һөйләмәҫкә тырышыу, совет яугирҙарын иҫкә алғанда туғандар ҡәберлегенә сәскәләр һалыу менән генә сикләнеү, тарих китаптары, мәктәп дәреслектәрендә элекке Чехословакияны инглиздәр һәм Америка һалдаттары ҡотҡарған, тигән хата фекер үткәрелһә лә, ябай халыҡ үҙен кем азат иткәнен яҡшы аңлай. Ҡаршылыҡ күрһәтеү хәрәкәте, партизандар һуғышы хаҡында тиҫтәләгән китаптар, диссертациялар яҙылған, кинофильмдар төшөрөлгән. Быны, минеңсә, социализм осорондағы совет яугирына күрһәтелгән хөрмәт, тип аңларға кәрәктер. Һуғыштан һуңғы йылдарҙағы әҙәбиәттә айырыуса Д.Мурзин тураһында мәғлүмәт күп бирелә. Минеңсә, яҡташыбыҙ ҙа, элекке Чехословакияла студенттар, эшселәр, ябай халыҡ алдында сығыш яһап, ике ил араһындағы дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен яйға һалыуға үҙ өлөшөн индергән. Үкенескә ҡаршы, 1968 йылғы “Прага яҙы” СССР—Чехословакия дуҫлығына кире йоғонто яһаған. Үҙаллы йәшәргә теләгән чех халҡы Изге Вацлав майҙанына сығып, совет танкыларын туҡтатырға тырышҡан: Карлов университетының философия факультеты студенты Ян Палах протест йөҙөнән үҙ-үҙен яндырып һәләк була, бер ни тиклем ваҡыттан һуң ошо уҡ хәл Ян Заяц менән ҡабатлана, йәмғеһе йөҙгә яҡын кеше һәләк була.*

*Тарихта “халыҡ хәтере”, “тарих барыһын да үҙ урынына ҡуя” тигән ябай ғына төшөнсәләр бар, йәғни, булып үткән ваҡиғалар, теләйһеңме, юҡмы, халыҡ хәтеренә яҙылып, киләһе быуындарға тапшырылып бара. Чехтар, словактар Ян Жижка бригадаһын, уның командиры Д.Мурзинды, һуғыштан һуңғы йылдарҙағы репрессияларҙы, көсләп колхозлаштырыу ваҡиғаларын, “Прага яҙын” әле булһа онотмай. Үлгәндәрҙең ҡәберенән йыл әйләнәһенә тере сәскәләр өҙөлмәй, ә бөйөк чех йырсыһы Карел Готт мәрхүм студенттарҙың рухына арналған йырын репертуарынан төшөрмәй. Бынан һуң үҙең дә аңламаҫтан: “Беҙ кем һуң чехтарға?” — тигән һорауға яуап эҙләй башлайһың.*

*Бөгөн иһә беҙ барыбыҙ ҙа капитализмда йәшәйбеҙ, ә етмеш йыл элек Совет Армияһы ҙур ҡорбандар биреп азат иткән Европа илдәре хәҙер Америка сәйәсәтенә буйһона. Шуға күрә беҙгә Д.Мурзин һәм Ян Жижка партизандар бригадаһы хаҡында дөрөҫлөктө хәҙер тулыһынса әйтергә кәрәк. Беҙҙә, Европаны фашизм ҡоллоғонан азат итеүсе илдә, геройҙарыбыҙға ҡарата икенсе төрлө ҡараш йәшәй. Башҡорт әҙәбиәтендә Генрих Гофмандың “Ҡара генерал” (1975, тик 1993 йылда ғына башҡортсаға тәржемәләнгән), “Личный враг Адольфа Гитлера” (Зайни Рафиков, “Ватандаш”, №2, 2003), Д.Мурзиндың “Дошман тылындағы фронт”*

*(2005), “Новая встреча на Дунае — мост в будущее” (“Ватандаш”, №5, 2005) тигән китаптарҙан һәм мәҡәләләрҙән башҡа төплө әйбер уҡырға тура килгәне булманы, булғандары ла геройҙың биографияһын ҡабатлап сығыуға ғына ҡоролған. Шуны иҫәпкә алып, чех телендә тарихсы, юрист, яҙыусы Ярослав Поспишилдың “Гиеналар” (1996, 1998), Карл Рихтерҙың “Домнивали домова” (“Ватанды яҡлаусылар”), Д.Мурзин менән иңгә-иң терәп һуғышҡан элекке партизан Ладислав Мначектың “Смерть се имену “Энгельхен” (“Үлем “Энгельхен” тип атала”), “Слоуп в Моравском красу” (“Гүзәл Моравалағы Слоуп”, 2001), “Рустар һәм Моравия” (2011), “Чехословакия тарихы” (1988), “Генерал Людвиг Свобода” (“Патек. Лидовы новины” журналы, №4, 2013), юридик фәндәр докторы, полковник Владимир Годбодтең “Из жизни офицера” тигән мемуарҙарын (2003) һ.б. тиҫтәләгән очерктар, байтаҡ интернет материалдарын уҡып сығырға тура килде. Төрлө ҡыҙыҡлы факттар таптым, асыштарға юлыҡтым. Д.Мурзиндың “Дошман тылындағы фронт” китабын Бөйөк Ватан һуғышына 60 йыл тулыуға арнап яҙыуына ҡыуандым. Ярай өлгөрөп ҡалған, уҡымлы, ҡыҙыҡлы китап, шаян телле, партизан һуғышы ваҡиғаларын мауыҡтырғыс итеп һөйләй унда автор!*

*1953 йылғы Ҙур совет энциклопедияһында Д.Мурзин тураһында мәғлүмәт булмауын — һуғыштан һуңғы йылдарҙағы Сталин репрессияларының эҙемтәһе, тип ҡарарға кәрәктер. Я.Поспишилдың “Гиеналар” ында “Гиеналар, геройҙар һәм башҡалар”, “Геройҙар һәм һатлыҡ йәндәр”, “Р.Гейдрихтың үлеме” тигән бүлектәре тотошлай Ян Жижка бригадаһына бағышланған, йыйынтыҡ ике тапҡыр — 1996, 1998 йылдарҙа нәшер ителгән. Эшләмәгән кеше генә хаталанмай, әлбиттә, йыйынтыҡтың етешһеҙлектәре лә бар — улары йыл һайын Карловы Вары ҡалаһында уҙғарылған “Литбратр” клубы ветерандары тарафынан ҡаты тәнҡитләнә — яҙмамда ул хаҡта ла әйтеләсәк.*

*Рәсәй һәм Башҡортостан киностудиялары Д.Мурзин тураһында яҡшы кинофильмдар төшөрҙө, минең үҙемә иһә режиссерҙар Радик Ҡоҙаяров менән Алексей Сидоровтың “Ҡара генерал” кинофильмы яҡын. Ләкин былар ғына аҙ тип уйлайым. Д.Мурзин һәм Ян Жижка партизандар бригадаһы тураһында поляктар, венгрҙар, словактар, чехтар, немецтар, инглиздәр байтаҡ әҫәрҙәр, кинофильмдар ижад иткән. Әлбиттә, берәй ваҡыт улар беҙгә лә килеп етәсәк. Бөгөн Чехияла “Гиеналар” (Я.Поспишил), “Үлем “Энгельхен” тип атала” (Л.Мначек) кинофильмдары популяр булып, партизандар һуғышын дөрөҫ сағылдырған әҫәрҙәр һанала. Йәнә лә шуны әйтер инем: Бөйөк Еңеүгә 70 йыл тулыу уңайы менән яҙылған мәҡәләмде тыуған илемдән бик алыҫта әҙерләйем. Әле студент саҡта уҡ Даян Баян улы менән ике тапҡыр осрашҡас, эш барышында уның күҙ ҡарашын тойғандай, үҙе менән кәңәшләшкәндәй, әңгәмәләшкәндәй булам, яугир тормошоноң быуаса билдәһеҙ яңы биттәрен асҡанда үҙемдә ҙур яуаплылыҡ тоям.*

*Кеше бер ваҡытта ла тик аҡтан йәки ҡаранан тормай, эшләмәгән кеше генә яңылышмай. Әгәр текста геройҙың ниндәйҙер хаталары, етешһеҙлектәре хаҡында әйтелә икән, был яҡташыбыҙҙың ролен һис кенә лә кәметмәй, ә киреһенсә, уны нисек бар, шулай күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә, тип уйлайым һәм бының өсөн алдан уҡ яҡындарынан һәм*

*уҡыусыларҙан ғәфү үтенәм. Партизан һуғышы ябай һуғыш түгел: аслы-туҡлы, кейемһеҙ, ҡоралһыҙ көйө ете-ят кешеләр араһында тау-урмандарҙа дошмандар менән алышыуы Мурзинға ла еңел булмағандыр. Күп ваҡытта командирҙың уңышы урындағы халыҡтың теләктәшлек итеүе-итмәүенән торған бит. Теләктәшлек итһә — уңыш йылмайған, итмәһә — уңышһыҙлыҡ, дошман ҡулына эләгеп һәләк булыу көткән.*

*Яҙмамда исем-фамилияларҙы, ер-һыу, ҡала атамаларын чех теле нормаларына тура килтереп бирергә тырыштым. Чех теле славян телдәре төркөмөнә ҡараһа ла, өйрәнеүе еңел түгел. Сәбәбе — тартынҡыларҙың күпләп бергә килеүе, һүҙҙәрҙең, беҙҙәгенән айырмалы рәүештә, үҙенсәлекле кире мәғәнәгә эйә булыуында. Мәҫәлән: прст — бармаҡ, прши — ямғыр яуа, првак — первокурсник, живот — жизнь, позор — иғтибар, вонь — хушбуй, черстви — яңы. Хатта алты-ете тартынҡынан торған һүҙҙәр ҙә күп осрай. Шулай уҡ "h" өнө лә бар чех телендә. Чех теленең тағы ла бер үҙенсәлеге һүҙ аҙағында "й" хәрефенең юҡлығында, шул сәбәпле ялғауҙарҙа "и" хәрефе яҙыла: мәҫәлән, Турчански (Турчанский), нови (яңы) һ.б. Быларҙы мин Г.Гофманда ла, Д.Мурзиндың үҙендә лә ер-һыу, ауыл-ҡалалар атамаларында күп хаталар китеүенә борсолоп яҙам. Даян ағай үҙе лә китабында: "Партизандарға команданы немец телендә бирҙем, ә словак, чех телдәрен һуғыш ваҡытында өйрәндем", — тигән ("Дошман тылындағы фронт"), тимәк, был телдәрҙе команда бирерлек кимәлдә үҙләштереп өлгөрмәгән. Йәнә, артабанғы яҙмаларҙа ҡайһы бер геройҙарҙың фамилиялары, исемдәре, инициалдары тулы булмауы ла мөмкин, сөнки улар төрлө сығанаҡтарҙан алынған.*

*Мәктәп дәреслектәрендә беҙ тарихта булған байтаҡ һуғыштарҙы өйрәнәбеҙ, уларҙың халыҡҡа ҡайғы-хәсрәт, рухи һәм матди юғалтыуҙар алып килеүен беләбеҙ. Һуғыш еңеүсегә лә, еңелеүсегә лә бәхет, шатлыҡ алып килмәгән, ләкин һәр һуғыш батырҙарын да, ауырлыҡтар алдында баҙап ҡалған ҡурҡаҡтарҙы ла тыуҙырған. Даян Мурзинды тотоп биреүселәргә Гитлер миллионлаған маркалар вәғәҙә итһә лә, чехтар араһынан уны һатырға теләүселәр табылмаған. Был да, минеңсә, ошо ерҙә йәшәүсе халыҡтарҙың мәрхәмәтлелеген, ҡотҡарыусыларға ҡарата ышанысын, хөрмәтен күрһәтә.*

*Әлеге яҙмам, ҡәҙерле уҡыусылар, Тыуған илебеҙҙән бик алыҫта фашизмға ҡаршы көрәшкән ватандаштарыбыҙға, һуғышта һәләк булғандар, хәбәрһеҙ юғалғандар, яуҙа һәләк булған атай-олатайҙарыбыҙ, ирҙәрен көтөп ҡартайған өләсәйҙәребеҙ һәм тыл ветерандарына (үкенескә ҡаршы, улар бик аҙ ҡалған), шулай уҡ һуғышты китап-журналдар аша ғына уҡып белгән, һуғыш күрмәгән йәш быуынға арнала. Һәр халыҡтың, бәләкәйме ул, ҙурмы, үҙ геройҙары, башҡаларҙы эйәртерҙәй шәхестәре була, һәм уларҙы ҙурлау, онотмау, ҡылған эштәренә ғәҙел баһа биреү — халыҡ эше. Әгәр изге эштәре ҙурҙан икән, бәләкәй ғәйептәрен ҙурайтып, исемдәрен аяҡ аҫтына һалып тапарға, кәмһетергә ярамай. Был тәңгәлдә беҙ Европа халҡынан өлгө алайыҡ, уларҙан өйрәнәйек, шәхестәребеҙҙе ҡәҙерләйек, онотмайыҡ, уларға һәйкәлдәр ҡуйайыҡ. Ерҙә башҡа һуғыш уты ҡабынмаһын тиһәк, тарихты беләйек, өйрәнәйек, унан һабаҡ алайыҡ, милләттәштәр!*

*Ихтирам менән, автор.*

## Кем һин, Даян Мурзин?

Ни өсөн Икенсе донъя һуғышы тарихына элекке Чехословакия партизандар һуғышы һәм Ҡаршылыҡ күрһәтеү көстәре менән инеп ҡалған? Европала, Чехословакияла һуғыш нисек башланған һәм тамамланған? Күп милләтле Европа халҡы фашистарға ҡаршы нисек көрәшкән, йәһүдтәр проблемаһына ҡарата ниндәй мөнәсәббәттә булғандар? Азатлыҡ яуланғандан һуң чехтар ниндәй юлдан китергә теләгән: советтар менәнме, әллә капитализм юлынанмы? Һуғыштан һуңғы йылдарҙағы репрессиялар, колхозлашыу, совет режимына ҡаршы демонстрацияларға сығыу, 1968 йылғы “Прага яҙы” ваҡиғалары халыҡ күңеленән юйылғанмы? Социализм ҡоролошо емерелгәндән һуңғы Чехословакия һәм башҡа соцлагерь илдәренең яҙмышы бөгөн кем ҡулында? Был һорауҙарға яуапты, минеңсә, тарихты белмәйенсә әйтеп биреп, бер үк ваҡытта әлеге ваҡиғаларҙы 1944—1945 йылдарҙа алып барылған партизандар һуғышынан айырып ҡарап булмай. Ғөмүмән, Чехословакияның һуғышҡа тиклемге сәйәсәтен аңлатмайынса, яҡташыбыҙ Даян Фәтхелбаян улы Мурзин етәкләгән Ян Жижка исемендәге партизандар бригадаһы хаҡында һөйләү мөмкин түгел.

...1938 йылдың мартында Америка, Англия, Франция кеүек илдәр Гитлерҙың һуғышҡа әҙерлек алып барыуына күҙ йомоп ҡарауы арҡаһында Германия Австрияны еңел генә баҫып ала. Икенсе донъя һуғышы тарихына “аншлюс” исеме аҫтында инеп ҡалған был “күҙ йомоу” Германияны СССР менән бәрелештереп, үҙҙәренән һуғышты ситкәрәк этәреү маҡсатында эшләнә. Еңеүҙән башы әйләнгән Гитлер артабан Чехословакияға баҫып инә, уның суверенитетын танымай. Был юлы ла ул еңел генә еңеүгә өлгәшә. Ни өсөн? Сөнки һуғышҡа тиклемге Чехословакияның 50 процент халҡы немецтарҙан торған, улар бигерәк тә илдең көньяҡ-көнбайышында күп була. Был хәл тарихҡа судеттар проблемаһы тигән исем аҫтында инеп ҡалған. Гитлер башта илдең германлашҡан ошо өлөшөн баҫып ала, чехтарҙы һәм башҡа милләт вәкилдәрен ҡыуып сығаралар. Ошо уҡ йылда Чехословакия немецтары Ҡарловы Вары ҡалаһында йыйылып, демонстрациялар ойоштора: унда үҙҙәренең Чехословакиянан айырылып сығыуын, автономия биреүҙәрен һәм 1918 йылда немецтарға ҡарата эшләнгән ғәҙелһеҙлекте төҙәтеү талаптарын ҡуялар. Тарих төпкөлөнә төшһәң, немецтар Чехословакия ерҙәренә X—XII быуаттарҙа уҡ килеп ултырған һәм артабан һан яғынан күбәйеп, үҙ партияларын булдырып, дәүләт органдарында ҙур постар биләй. 1938 йылға тиклем Чехословакияла судет немецтары партияһы була. Немецтар банктарҙа, мәғариф, сәнғәт, төҙөлөш, архитектура, мәҙәниәт өлкәләрендә ҙур урындар биләй һәм уңыштарға ирешә. Әлбиттә, әлеге демонстрацияны тараталар, судет партияһы башлығы Генлейн һәм уның теләктәштәре Германияға ҡаса. 1938 йылдың 19 майында Чехословакия интеллигенцияһы ла манифестацияға сыға, артабан чехтар менән немецтар араһында Прагала, Брнола һәм башҡа ҙур ҡалаларҙа бәрелештәр булып тора — ҡыҫҡаһы, чехтар менән судет немецтары уртаҡ тел таба алмай.

Судет проблемаһын хәл итеүгә Англия, Франция һәм АҠШ ҡыҫыла һәм 1938 йылдың 15 сентябрендә Англия премьер-министры Н.Чемберлен Чехословакияла “тыныслыҡ булдырыусы өс илдең вәкиле” сифатында Гитлер менән осрашыуға килә һәм Германияның Чехословакияға баҫып инеүенә ҡаршы түгеллеген белдерә. 19 сентябрҙә Англия менән Франция Гитлер һораған ерҙәрҙе Германияға ҡушыу тураһында документ әҙерләп, Чехословакия премьер-министры Эдвард Бенешҡа тапшыра. 21 сентябрҙә был тәҡдим икенсегә ҡабатланғас, Чехословакия ошо уҡ көндө капитуляция иғлан итә.

Сталин Чехословакияға ярҙам итергә әҙерлеген белдерә: быға дәлил итеп, ул сик буйына беренсе эшелонға 6 армия төркөмө, 40 уҡсылар һәм кавалерия дивизияһы ҡуя, механизацияланған танк һәм авиация частары тулы әҙерлеккә килтерелә.

Ҡапитуляцияны чехословактар “Сик буйын нығытырға!”, “Дөйөм мобилизация иғлан итергә!”, “Беҙ яңғыҙ түгел!” тигән транспаранттар тотоп ҡаршылай, халыҡ демонстрацияларға сыға, забастовкалар, митингтар башлана. Быны көтмәгән Англия менән Франция Гитлерҙы үҙҙәренән тағы ла ситкәрәк этәреү маҡсатында чехтарға: “Дөйөм мобилизация иғлан итегеҙ!” — тип кәңәш бирә. Ике аҙна эсендә Чехословакияла 2 миллионлыҡ армия төҙөлә. Тик һуң була. Ил башлығының ихтыярһыҙлығы арҡаһында 29—30 сентябрҙә Даладье, Гитлер, Чемберлен һәм Муссолини 10 октябргә тиклем Судет өлкәһен Германияға ҡушыу тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуялар һәм ул 30 сентябрҙә үҙ көсөнә инә.

Октябрь башында сик буйы райондарын Германияға ҡушалар, Гитлер Тешин өлкәһен дә тартып ала, ә ноябрҙә иһә Словакияның көньяҡ һәм көньяҡ-көнбайыш райондарын Венгрияға бирә. Һөҙөмтәлә, Чехословакия илдең 40 процент сәнәғәт, яғыулыҡ, транспорт, коммуникация һәм сырье базаһын тәшкил иткән өстән бер өлөшөн юғалтҡас, кризис башлана. Э.Бенеш отставкаға китә. Уның урынына исем өсөн ҡартайған һәм ихтыярһыҙ Эмиль Гаханы ҡуялар (1872—1945).

Тап ошо ваҡытта Словакия халыҡ партияһы һәм Ҡарпат аръяғы Украинаһы ла автономия талап итә — уларҙың да үтенесе тиҙ ҡәнәғәтләндерелә: Словакия Автономиялы республикаһының башлығы итеп Йозеф Тисо (1887—1947), Ҡарпат аръяғы Украинаһының башлығы итеп Андрей Бродий ҡуйыла, ә Чехословакия “Чехо-словакия” тип атала башлай.

1939 йылдың 10 мартында Й.Тисо Берлинға саҡырыла. Гитлер уға: “Йә Чехословакиянан айырылып Венгрияға ҡушылаһың, йә үҙаллы һәм бойондороҡһоҙ ил булып Германия империяһы ҡанаты аҫтына һыйынаһың”, — тигән ультиматум ҡуя. Й.Тисо тәҡдим менән тиҙ ризалаша.

1939 йылдың 15 мартында Гитлер Чехословакияға баҫып инә, уны “Бөйөк Германия империяһының “Богемия һәм Моравия” исеме аҫтындағы айырылмаҫ өлөшө” тип иғлан итә. Венгрия иһә Ҡарпат аръяғы ерҙәрен тулыһынса баҫып ала. Илгә баҫып инеү менән Гитлер унда үҙ режимын урынлаштыра: немецтар Чехословакия коммунистар партияһына ҡаршы көрәш башлай, киң билдәле партия етәкселәре Ян Шверма, Клемент Готвальд подпольеға китә.

Фашистарҙың баҫып инеүенә яуап итеп Прагала 8 мең кеше Вацлав майҙанына демонстрацияға сыға, улар араһында вуз уҡытыусылары, студенттар, эшселәр күп була. Демонстрация ҡоралլы көс менән таратыла. Вуздар, мәктәптәр ябыла, студенттар, уҡытыусылар төрмәләргә, концентрацион лагерҙарға ҡыуыла. Бөтә завод-фабрикалар Германия файҙаһына эшләй башлай. Халыҡ көсләп “арийлаштырыла”. Немец теле дәүләт теленә әйләнә, туған телдә һөйләшеү ҡәтғи тыйыла. Һигеҙ сәғәтлек эш көнө туҡтатыла, чехословактарға эш хаҡын немецтарға ҡарағанда өс тапҡырға кәмерәк түләйҙәр, ҡаршы сығыусыларҙы концлагерҙарға ташлайҙар. 1939 йылда Э.Гаха етәкселегендәге Чехословакия протектораты тулыһынса Германия составына инә һәм уның ҡеүәтен арттырыуға эшләй. Мәсьәләнең былай хәл ителеше Англия менән Францияға яңынан иркен тын алырға мөмкинлек бирә.

Ләкин чехтар быны менән ризалашмай: 1939 йылдың майында 10 меңгә яҡын кеше яңынан көрәшкә күтәрелә. Быға яуап итеп немецтар интеллигенцияға

ҡаршы көрәш башлай — ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 25 мең коммунист фашист төрмәләрендә һәләк була. Был ваҡытта Словакияла Й.Тисо хөкүмәте лә коммунистарға ҡаршы көрәш башлай һәм Германия менән 25 йылға килешеү төҙөй. Артабан Гитлер Германия дивизияларын Словакияның көнбайышына күсерә, Польшаға баҫып инеү буйынса хәрби килешеү төҙөй. Был килешеүҙә “Словакия йыл һайын Германияға 60 мең эшсе ебәреп торорға тейеш” тигән пункт та була. Ил байлығы тулыһынса Германияға буйһона, Тисо иҡтисад, сәйәсәт, мәғариф мәсьәләләре буйынса ла Гитлер менән кәңәшләшеп эшләргә тейеш була.

1940 йылда Гитлер Словакияның тулыһынса фашистлаштырылыуын, протекторат менән Словакия араһындағы сиктең ябылыуын, коммунистарға ҡаршы киң көрәш йәйелдерелеүен, Словакия йәһүдтәрен ҡулға алыуҙы талап итә. Илдә эшһеҙлек, аслыҡ, ризаһыҙлыҡ башлана, был хәл үҙ сиратында илдә ҡаршылыҡ көстәренең артыуына килтерә. Словакия коммунистар партияһынының абруйлы етәкселәре Ю.Дюриш, Я.Осога, Л.Бенада 1939 йылда подпольеға китә, улар Словакия Коммунистар партияһы һәм Ҡаршылыҡ хәрәкәтенә етәкселек итәләр. Ҡаршылыҡ хәрәкәте көстәре 1939 йылдың 28 октябрендә баш күтәрә, ләкин фашистар уларҙың 100 меңдән артығын үлтерә. Прагала, Брнола һәм башҡа ҡалаларҙа 1000-дән ашыу юғары уҡыу йорто уҡытыусылары һәм студенттары ҡулға алына, 9 студентты атып үлтерәләр, ҡалғандары концлагерҙарға ебәрелә, илдәге барлыҡ юғары уҡыу йорттары ябыла.

1940—1941 йылдарҙа гитлерсылар подпольелағы коммунистарға ҡаршы тағы ла бер көслө һөжүм яһай: гестапо 4300 коммунисты ҡулға ала, йәнә подпольелағы 700 коммунист гестапо ҡулына эләгә. Улар араһында В.Сынек, О.Сынек, Э.Уркс, Э.Клима кеүек Чехословакия Коммунистар партияһы етәкселәре була. Ләкин Ю.Фучик, Я.Покорный, Я.Черны, М.Красный, В.Ванчура, В.Маковский, Ф.Галас, Я.Осога кеүек коммунистар көрәште дауам итә. Ю.Фучик Чехословакия Милли-революцион көстәренең подпольелағы етәксеһенә әйләнә.

1942 йылда Словакияла тәүге Милли-революцион комитет төҙөлә. Быны ишеткәс, Гитлер протектораттың етәксеһе фон Нейратты эшенән алып, уның урынына Рейнхард Гейдрихты ҡуя. Уныһы иһә килеү менән “эш күрһәтергә” тотона: илдә ғәҙәттән тыш хәл иғлан ителә, хөкүмәт алмаштырыла, подпольела тороп көрәш алып барған офицерҙар союзы етәксеһе генерал А.Элиаш язалап үлтерелә. Тик ике ай эсендә генә 3 мең кеше концлагерҙарға ебәрелә, 342 кеше үлем язаһына тарттырыла. Террорға яуап итеп, Ҡаршылыҡ хәрәкәте саботаж ойоштора: завод-фабрикаларҙа, тимер юлында, ҡорал, аҙыҡ-түлек, кейем складтарында диверсиялар көсәйә, гестапоға һатылған “тоғро” чехтар, словактар үлтерелә. Брно хәрби гарнизоны генерал Лужа етәкселегендә ҡораллы восстаниеға әҙерләнә. Словакияла 18 забастовка үтә, “Вальтер” заводында ғына 2 меңдән ашыу кеше баш күтәрә — уларҙы гестапо ҡаты язаға тарттыра. Халыҡ сығышынан ҡурҡҡан Й.Тисо 50 мең кешене СССР-ға ҡаршы һуғышҡа оҙата, Германия файҙаһына тағы ла 35 мең кешене мобилизациялай.

Гитлер тарафынан протекторатҡа хужа итеп ҡуйылған Карл Герман Франк чехтарға немецтарҙың баштан-аяҡ әфәнде булыуын төшөндөрә башлай, йәғни, фюрер һүҙҙәре менән әйткәндә, “чехтарҙың империяға буйһонғанлығын, немецтарға баш эйергә тейешлеген ҡырҡа саралар менән тәьмин итергә, Моравияның империяның айырылғыһыҙ өлөшө икәнлеген, немецтарҙың сикләнмәгән хоҡуҡтар менән файҙаланғанын аңлатырға” тотона. Чехтар һәм

словактар Чехословакияның айырым дәүләт булып йәшәүен оноторға, ҡаршылыҡ күрһәтһәләр, үлем язаһы көтөүен белергә тейеш була. 1942 йылдың 27 майында протекторатҡа Англия парашютсылары төшкәс, Гитлер уларға ярҙам иткән кешеләрҙе, партизандарҙы йәшергән ауылдарҙы яндырырға, ер йөҙөнән юҡ итергә бойора. Парашютсылар протекторат хужаһы Р.Гейдрихты үлтергәс, бойороҡ үтәлә: Лидице, Лежаки ҡасабалары бер төн эсендә яндырыла, кешеләрен язалап үлтерәләр. Был террор акцияһы ваҡытында ике аҙна эсендә 3188 кеше ҡулға алына, 1357 кеше язалап үлтерелә, барыһына ла: “Парашютсыларға ярҙам иткәнһегеҙ, гестапоға әйтмәгәнһегеҙ”, — тип ғәйеп тағыла. Ҡирилл һәм Мефодий православие ҡорамында йәшеренгән парашютсыларҙы карателдәр 18 июндә таба: уларҙың өсәүһе атыш ваҡытында һәләк була, ҡалған дүртәүһе гестапоға бирелмәҫ өсөн атылып үлә.

Беренсе донъя һуғышында Австро-Венгрия составына ингән Чехословакияла — 500 кеше, Икенсе донъя һуғышында 360 мең кеше, Прага восстаниеһында 1070 кеше һәләк булған. 1944 йылда совет ғәскәрҙәре Словакия сигенә яҡынлашҡас, Э.Бенеш Ян Жижка исемендәге партизан бригадаһы менән бәйләнеш булдырыу маҡсатында улар торған Ҡнягиня тауына “Вольфрам” разведчиктар төркөмөн ташлай. Уларҙың маҡсаты — Мурзин менән элемтә булдырыу, отрядтың Англия менән берлектә һуғышыуын тәьмин итеү була. Бының өсөн Мурзинға ҙур сумма аҡса тәҡдим итәләр, тик ул баш тарта. Украина партизан штабы: “Вольфрам” менән элемтәгә инмәҫкә”, — тигән бойороҡ ебәрә.

1941 йылда Германияның СССР-ға баҫып инеүе донъяла Гитлерға ҡаршы көстәрҙе берләштереүҙә ҙур роль уйнай, Европа коммунистары Ҡаршылыҡ хәрәкәтен әүҙемләштерә башлай. 18 июлдә совет хөкүмәте Чехословакия менән “Үҙ-ара берҙәмлек, туғанлыҡ һәм ярҙамлашыу хаҡында килешеү” төҙөй, СССР-ҙа Быҙаулыҡ ҡалаһында Айырым чехословак батальоны төҙөлә, етәксеһе итеп генерал Людвиг Свобода тәғәйенләнә, һуңынан уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

1943 йылда фашистар Сталинградта, Курск дуғаһында еңелеүгә осрай. Был факт та Ҡаршылыҡ хәрәкәтенә, айырыуса Беренсе Чехословакия айырым батальонына рухи көс бирә. Тап ошо йылда Словакия дивизияһы һалдаттары һәм офицерҙары күпләп совет ғәскәрҙәре яғына сыға башлай. Йыл аҙағына “СССР һәм Чехословакия араһында Дуҫлыҡ, үҙ-ара ярҙамлашыу һәм һуғыштан һуңғы хеҙмәттәшлек буйынса килешеү” төҙөлгәс, чех коммунисы һәм һуғыштан һуңғы йылдарҙа Чехословакия Президенты булған Клемент Готвальд: “Был Килешеү беҙҙең киләсәгебеҙгә юл һала, тормошобоҙҙо үҙебеҙсә төҙөргә мөмкинлек бирә. Киләсәгебеҙҙең нигеҙен нисек төҙөһәк, шулай буласаҡ, дуҫтар”, — тип сығыш яһай. Ә илдең һуғыштан һуң ниндәй юлдан китерен аныҡ ҡына күҙ алдына баҫтыра алмаған эмиграциялағы хөкүмәт етәксеһе Э.Бенеш СССР менән килешеү төҙөү өсөн Англиянан Мәскәүгә килә.

Англия Бенешҡа 1940 йылда эмиграциялағы хөкүмәт ойоштороорға рөхсәт итә, тик һуғыштан һуң ил социализм юлынан китергә тейеш түгел, тип күрһәтелә. Бенеш Чехословакия—Польша конфедерацияһын төҙөү хыялы менән йәшәй, әлбиттә, уның идеяһын инглиздәр ҙә хуплай: “Әгәр шулай була ҡалһа, — тиҙәр улар, — был социализмға ҡаршы тороу өсөн “санитар кордоны” буласаҡ”.

Һуғыштан һуң Чехословакияла Халыҡ фронты партияһы еңеп сыҡҡас, Бенеш отставкаға китә. 1948 йылда Бенеш яңынан Англияға китә, уның урынына Чехословакия Хөкүмәте председателе вазифаһына К.Готвальд һайлана.

## “Ахтунг, партизанен!”
## Ян Жижка бригадаһының барлыҡҡа килеүе

1941 йылдың 29 июнендә Совнарком һәм ВКП(б) Үҙәк Комитеты партия һәм совет ойошмаларына: “Дошман ҡулы аҫтында ҡалған ауыл-ҡалаларҙа партизан һуғышы йәйелдерегеҙ, немецтарҙы туҡмағыҙ, диверсия төркөмдәре ойоштороғоҙ, фашистарҙың ҡорал складтарын, тимер юлдарын шартлатығыҙ, коммуникацияларын юҡ итегеҙ, фашизмға ярҙам итеүсе һатлыҡ йәндәрҙән үс алығыҙ, гитлерсыларға түҙеп тора алмаҫлыҡ шарттар булдырығыҙ!” — тип мөрәжәғәт итә. 1944 йылда Үҙәк Комитетҡа Чехословакия, Венгрия, Румыния компартиялары партизан хәрәкәте йәйелдереүҙә ярҙам һорап мөрәжәғәт итә. Шул нигеҙҙә Политбюро 1944 йылдың 5 июнендә ошо илдәрҙең граждандарынан торған партизан отрядтары төҙөү тураһында ҡарар ҡабул итә. СССР разведка мәктәптәрендә уларға иң яҡшы уҡытыусылар беркетелә. Д.Б.Мурзин Киевҡа яҡын Святошино курортында урынлашҡан разведка мәктәбендә уҡый. 1944 йылда Польшаға — 12 (226 кеше), Венгрияға — 10 (280 кеше), Румынияға — 12 отряд һәм 8 төркөм, Чехословакияға 64 отряд (1353 кеше) оҙатыла, улар һуңынан төрлө милләт вәкилдәренән торған ҙур партизан отрядтары һәм бригадаларға әйләнә. Разведка мәктәптәрендә Коминтерн ағзалары Георгий Димитров, Вильгельм Пик, Матьяш Ракоши, Клемент Готвальд һ.б. эшләй. Башҡортостанда, Кушнаренко ауылында ла һуғыш йылдарында шундай мәктәп эшләгән, 1944 йылда унда Долорес Ибаррури булып китә. Партизан мәктәбендә Башҡортостандың Саҡмағош районынан хәрби врач Мирғәлим Латипов, Учалынан Мөждәбә Шаһиев, Мәсетленән Татр тауҙарында “Василий Ахмадуллин” булып йөрөгән Вафа Әхмәҙуллин кеүек ҡаһармандар ҙа уҡый. “Булманы башҡорт ҡайҙарҙа...” тип йырланған кеүек, ошо исемлеккә атайымдың Югославияла партизан булып йөрөгән 1922 йылғы ағаһы Ғәйфулла Ҡолмөхәмәтовты ла индерер инем. Үкенескә ҡаршы, иҫән сағында ул ошо турала бер нәмә лә һөйләмәне. “Тыйылған тема”, — ти торғайны. Минеңсә, бында һис аптырарға ярамай: Д.Б.Мурзин да бит “Дошман тылындағы фронт” исемле китабын Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға 60 йыл тулғас ҡына яҙа алды...

1944 йылдың авгусында Словакияның Турчанска-Мартин районы Склабино ауылына яҡын ергә 31 августа ҡараған төндә Ҡыҙыл Армия сафында тулы әҙерлек үткән тәүге 21 парашютист төшөрөлә. Улар араһында командир урынбаҫары Павел Морозов, Саҡмағош егете, хәрби врач Мирғәлим Латипов, радистка Александра Тимохина, Владимир Кучинский һәм иң йәше — 14 йәшлек “тәжрибәле” партизан Валентин Николаев, сәйәси комиссар Александр Турский, өлкән радист Владимир Коломацкий, шулай уҡ совет разведка мәктәптәрендә әҙерлек үткән чехословактар: штаб начальнигы урынбаҫары Мартин Валаштиак, рота старшинаһы Онджей Мелек, ашнаҡсы Ян Колоджей, Михал Дупкала, Штефан Петруш, Ян Сегеч, Йозеф Михалек, Франтишек Ткач, Михал Масарик, Йозеф Немец, Ян Счур һәм Франтишек Ралбовский була.

Партизан булыу еңелме? Д.Мурзинға тәүге партизан “һабаҡтарын” 1941 йылда Украина партизан штабы начальнигы Гнибеда бирә, уның тәүге эше шул була: урманда аттарҙа аҙыҡ-түлек алып китеп барыусы румындарға тауыштынһыҙ һөжүм итеп, йөктө отрядҡа алып килергә. Ләкин операция ваҡытында бер партизандың түҙемлеге етмәй, атыу тауышы яңғырай. Ә немецтар урмандағы һәр тауышҡа иғтибарлы булған — шул минутта килеп етәсәктәр. Задание үтәлһә лә, ебәрелгән хата арҡаһында төркөм тиҙерәк урманды ташлап китергә мәжбүр була, сөнки оҙаҡламай тауҙарҙа облава башланасаҡ.

Яңы 1942 йылды Мурзин немец эшелонын шартлатыу "бүләге" менән ҡаршылай. Башта уға был хәл малайҙарса ҡыҙыҡ булып тойола, әлбиттә, ләкин 128 үле немецты күреү, 24 вагондың ҡолауы уны нык тетрәндерә.

Һуғышта төрлө телдәр белгән һалдаттар ҙур һорау менән файҙаланылған. Мурзиндың күп телдәрҙе аңлауын иҫәпкә алып, Гнибеда уны артабан разведка төркөмө командиры итеп тәғәйенләй.



*Ян Жижка исемендәге бригаданың тәүге командиры Ян Ушияк*

Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ: бейек тау итәгендә урынлашҡан "ер аҫты ҡалалары"... Ә тауҙарҙа ҡар оҙаҡ ята, партизан өсөн ҡар яуыуы шатлыҡ түгел. Ошо "ер аҫты ҡалалары"нда кемдеңдер ире, атаһы, ҡустыһы көнө ни менән бөтөрөн, ҡайҙа үлем табырын белмәйенсә, һәр минут һайын хәрби бойороҡ көтөп, араларында, бәлки, үҙен ысын партизанмын тип күрһәтеп, асылда һатлыҡ йән булып йөрөгәндәрҙән ҡурҡып йәшәй. "Ер аҫты ҡалалары"нда бетләү — ғәҙәти күренеш, аслы-туҡлы йәшәү, һыуыҡта йоҡлау, һыу, аяҡ һәм өҫ кейеме табыу проблемалары, айҙар буйына йыуынмау яугирҙарҙың һаулығына ла, кәйефенә лә кире йоғонто яһай, шул сәбәпле күптәре күңел төшөнкөлөгөнә бирелә. Арыу-талыу, алһыҙ-ялһыҙ һуғышыу, йыш урын алмаштырыуҙар уларҙың ҡәҙимге кешелек сифаттарын юҡ итеп, ҡырағайлыҡҡа килтерә. Сер түгел: партизандарҙың пленға төшкән немецтарҙы башта язалап ләззәтләнеүе, һуңынан ғына атып үлтереүе лә ғәҙәти хәл һаналған, үҙ сиратында немецтар ҙа шулай иткән.

Д.Мурзиндың иҫтәлектәрендә 1943 йылда бер ағаһының һуғыштың бишенсе көнөндә, икенсеһенең яраларҙан госпиталдә, ә кейәүенең һуғыштың унынсы көнөндә үк һәләк булыуын ауыр кисереүе тураһында яҙыла. Ошондай мәлдәрҙә партизандарға яҡындарын, һөйгәндәрен, балаларын уйлау ғына көс-ҡеүәт, өмөт-ышаныс биргән, түбән тәгәрәүҙән һаҡлаған. Бөгөн ҡайһы бер чех яҙыусылары "Ян Жижка исемендәге бригада партизандары эскән, тәртипһеҙ булған", тип уларҙы насар яҡтан ҡылыҡһырларға тырыша. Эйе, партизандар эскән. Ҡышҡы һыуыҡтарҙа сливовица (сливанан эшләнгән араҡы) эсеп, һыуыҡ тейеүҙән һаҡланырға тырышҡан. Ябай халыҡ партизандарға ышанған, үҙенең ҡотҡарыусыһы тип ҡараған һәм улар өсөн бер нәмәһен дә йәлләмәгән. Һәр ауылда, ҡасабала, ҡалала уларға икмәк менән бергә сливовица ҡойоп биргәндәр — был чехтар, словактарҙың бөгөн дә һаҡланған изге йолаһы.

Партизандарға урындағы халыҡта ирекә, азатлыҡҡа өмөт-ышаныс уятыу өсөн генә лә ҡурҡыныс операцияларға барырға тура килгән. Бына бер миҫал. Молдавияла Будея тигән ауылда Мурзин бер төркөм партизандар менән 120 румын, 30 немецты ҡулға ала, бынан тыш, уларҙың ҡулына трофей автоматтар менән бергә 10 литр спирт эләгә. Шатланғандармы улар быға? Яуап ыңғай. "Москва не пала!" — Мурзин партизандарға Мәскәүҙән әйләнеп ҡайтҡас шулай хәбәр итә, быға күбеһе хатта ышанып та бөтмәй. Мәскәүҙең дошман ҡулына төшмәүен ишетеү партизандар өсөн ҙур шатлыҡ була. Был ваҡытта халыҡтың еңеүгә өмөтөн өҙөү маҡсатында баш ҡала хаҡында ялған листовкалар таратылған була.

Тыуған ерҙән алыҫта һуғышыу совет партизандарына еңел булмаған. Үҙ ереңдә һуғышыуы бер, сит ерҙә һуғышыуы — бөтөнләй икенсе нәмә. Халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, холоҡ-фиғеле, тәбиғәт үҙенсәлектәре һ.б. ҙур әһәмиәткә эйә. Партизан мәктәбендә разведчиктарҙы урындағы халыҡ менән ипле мөнәсәбәттә булырға, штабҡа даими отчет биреп торорға, Р.Гейдрихты үлтергән парашютсылар һәләк булғандан һуң Лондон менән бәйләнешкә инмәҫкә, дисциплина һаҡларға, иң мөһиме — совет ғәскәрҙәре һөжүме алдынан немецтарҙың коммуникацияларын ҡаҡшатырға тейештәр. Ә Совет Армияһын был ваҡытта генерал-фельдмаршал Шернерҙың 2700 орудиеһы һәм 2200 танкыһы булған бер миллионлыҡ ғәскәре көтөп торған.

Һуғыш кешенең тышҡы ҡиәфәтен генә түгел, холоҡ-ҡылығын, эске донъяһын да үҙгәртә. Бескид тауҙарында партизандарға Ҡржановский, Неманов, Ткач кеүек урмансылар күп тапҡырҙар ярҙам итә. Бер ваҡыт урмансы өйөндә төшкө аш ашап ултырғанда Мурзин иптәштәренең, былар минең ризыҡты тартып алып ҡуймаһындар, тигән кеүек ҡабалан-ҡарһалан ашауына иғтибар итә һәм: "...Эйе, ҡан, күҙ йәштәре һәм аслыҡ егеттәргә үҙ йоғонтоһон индереп өлгөргән булһа ла, уларҙың ҡәҙимге аш еҫе сығып торған тыныс өйҙә үҙҙәрен ипле тоторға тырышыуы ҡабаттан элекке кешегә әүерелергә ярҙам итер", — ти ("Дошман тылындағы фронт", 92-се бит).

Партизан ғәҙәти булмаған шарттарҙа ла юғалып ҡалмаҫҡа, эшләгән эшен анализлай, етешһеҙлектәрҙе ваҡытында төҙәтә белергә, һәр заданиеның үтәлеүе-үтәлмәүе хаҡында үҙәккә хәбәр ебәреп торорға тейеш. Был ҡағиҙәләрҙең үтәлешен Мурзин Склабиноға төшкән тәүге көндән үк талап итә башлай. Словак милләтле поручик Ян Ушияк — төркөм етәксеһе, ә Мурзин штаб начальнигы итеп билдәләнгән. Парашюттан һикергәндә Мурзин аяғын ағасҡа бәреп ауырттыра. Шаян холоҡло Ушияк, быны ишеткәс: "Әгәр белгән булһам, братр (туған), балаҫ түшәп ҡуйыр инем", — тип көлөп ҡаршылай. Быҙаулыҡта йәшәгәндә ул башҡорттарҙың мәҡәл-әйтемдәре менән ҡыҙыҡһынып, яҙып алған икән. Хәтерле Ушияк уларҙы яйы сыҡҡан һайын урынлы ғына итеп әйтергә ярата.

Партизанға тейендеке кеүек етеҙлек, сослоҡ, тиҙ ҡарар ҡабул итә белеү кеүек сифаттар ҙа кәрәк. Иң ҡыйын мәлдәрҙә лә Мурзин партизандарҙа ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек сифаттары тәрбиәләгән. Был хаҡта ул үҙе лә: "Мин үҙемде йәлләмәйенсә, бәлки, фашист пуляһы ғүмеремде ҡыйыр тип, гел иң ауыр урындарға тығылһам да, пуля мине урап үтте", — ти.

Червоня Гребля ауылы өсөн барған һуғышта партизандарға ауыл кешеләре лә ярҙамға килә. Тик һуғыш ҡорбанһыҙ булмай. Морозов отрядынан Таран фамилиялы ике шәп партизан, радистка Надя һәләк булалар. Ҡарателдәр уларҙың өсөһөн дә төрмәгә бикләй ҙә, сигенер алдынан ут төртөп ҡасалар. Партизандар килгәндә, унда: "Ҡәҙерле командирыбыҙ! Беҙ барыбыҙ ҙа намыҫлы үлем менән үләбеҙ, антыбыҙға тоғро ҡалдыҡ", — тигән яҙыу ғына ҡалған була. Был ҡанлы иҫтәлек, һуғыш тамамланғас, Украина Верховный Советы һәм Ҡоммунистар партияһы Үҙәк Ҡомитеты архивына ебәрелә. 1944 йылда немецтар айырыуса ҡотора: "Германияның айырылмаҫ өлөшө" тип иғлан ителгән протекторатты Гитлер теҙләндерергә теләй, Праганы "Германияның икенсе баш ҡалаһы" тип атай. Тауҙарҙа үҙенә тынғы бирмәгән, эшелондарҙы ҡолатҡан, коммуникацияларҙы сафтан сығарған, күперҙәрҙе шартлатҡан Ян Жижка исемендәге бригада партизандарын Гитлер "бандиттар" тип атай.

Склабинола парашютсыларҙы М.Штефаник төркөмө ҡаршылай, йәшерен рәүештә костелға алып бара һәм Ҡаршылыҡ хәрәкәте көстәре Милли комитеты рәйесе Ян Мазур менән таныштыра. Халыҡ алдында бәләкәй генә митинг эшләйҙәр. Сығыш яһаусылар немец фашистарына ҡаршы көрәште көсәйтеү, дуҫлыҡ, берҙәмлек хаҡында һөйләй, руханиҙар Совет Армияһына рәхмәт белдереп доға ҡыла. Шунда араларынан берәүһе: “Беҙ барыбыҙ ҙа славяндар, тимәк, бер туған халыҡтар. Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙгә ярҙамлашайыҡ, фашистарға ҡаршы бергәләп көрәшәйек, берлектә көс!” — тип сығыш яһаған, Д.Мурзинға ла һүҙ бирәләр. Ул иһә СССР-ҙа генерал Л.Свобода етәкселегендә айырым Чехословакия корпусы ойошторолоуы һәм уларҙың хәҙерге ваҡытта немецтарға ҡаршы алып барылған хәрби операцияларҙа әүҙем ҡатнашыуы тураһында һөйләй. Шуның артынса партизандар менән китергә теләк белдереүселәр яҙыла: улар араһында Склабино ауылынан 200 кеше, Ҡиевтан төшөрөлгән 22 парашютист, концлагерҙан ҡасып, тауҙарҙа йәшенеп йөрөгән элекке хәрбиҙәр, хатта араларында Америка, Англия летчиктары ла була. Украина партизандар штабына буйһонған был яңы төркөм 315 кешегә барып етә, Мартин, Врутек, Стречна ҡалалары өсөн барған ҡаты һуғыштарҙа ҡатнаша.

16 сентябрҙә немецтарҙың Моравияға сикте ябыуы һәм һаҡты көсәйтеүе арҡаһында партизандар Велки Ҡарловицы ҡалаһы тирәһендә сигенергә мәжбүр була. Урман-тауҙарҙа ҡайҙа баҫһаң — засада, ҡайҙа барһаң да, “Ахтунг, партизанен!” тигән таҡталар эленеп тора. Иртәнге һигеҙҙән киске бишенсе яртыға тиклем генә урамға сығырға рөхсәт ителгәнгә күрә, ябай халыҡ күп ваҡытын өйҙә үткәрә. Приказға буйһонмаусылар атыуға хөкөм ителә. Хатта урманға утынға барырға ла ярамай: кем бара — атыла. Был ваҡытта һатлыҡ йәндәр ҙә йоҡлап ятмай, кем урманға утынға барғанын шундуҡ гестапоға еткерә. Һәр ҡала, ауыл, ҡасабала бойороҡто үтәмәгәндәрҙең аҫыулы кәүҙәләре эленеп тора.

Ян Жижка бригадаһының тәүге командиры Ян Ушияк һатлыҡ йән Франта Дворжак арҡаһында һәләк булғандан һуң, етәкселек итеү Мурзин ҡулына күсә. Бригадала хатта тотош ғаиләләре менән һуғышҡан кешеләр булған, шаян холоҡло Мурзин уларҙы “ғаилә батальондары” тип атай. Ләкин “ғаилә батальондары” командирға ҙур проблемалар тыуҙыра, шуға күрә ул төркөмләп хәрәкәт итеү юлына күсә. Чехословакияның ҡалын урмандары, йәшерен мәмерйәләре, замоктары һәм бейек тауҙары — партизандар өсөн йылы өй ҙә, дошмандарҙан йәшеренеү урыны ла. Словакия тауҙары, протекторат урмандарында “Власть” (А.Гарницкий), “Мистр Ян Гус” (Фомин, Мирослав Тума-Пих), “За Прагу!” (командиры И.Иванов, штаб начальнигы Й.Фомие, комиссары Иржи Незвал), “Доктор Мирослав Тирш” (командиры Лабунский, комиссары Йозеф Ҡагала), “Ян Ҡоменский” (командиры Григорий Мельник, комиссары Н.Химич), “Ермак” (командиры Н.Дмитриев, штаб начальнигы М.Петровский, комиссары Л.Железняк) кеүек бригадалар ҙа хәрәкәт итә. Уларҙың да һәр береһе Мурзин тәжрибәһе буйынса отрядтарға, отрядтар иһә төркөмдәргә бүленеп хәрәкәт итә.

Бригада 1944 йылдың 21—22 сентябрендә Велки Ҡарловицы ҡалаһына яҡын урында протекторатҡа үтеп инергә бойороҡ ала һәм ошо заданиены үтәү маҡсатында 28—29 сентябрҙә диңгеҙ кимәленән 1600 метр бейеклектә ятҡан Ҡнягиня тауы итәгенә килеп урынлаша. Унда ла немецтар партизандарға тынғы бирмәй: ваҡыты-ваҡыты менән самолеттарҙа разведка яһай.

Октябрь айында Ян Жижка бригадаһы биш үҙаллы төркөмгә бүленә, сөнки протекторатҡа төркөмләп инеү, төркөмләп һуғышыу күпкә ҡулайлыраҡ табыла. Тәүге төркөм Визовицы, Всетин ҡалалары тирәһендә була, уға Петр Будько етәкселек итә. Злин, Голешов тирәһендәге икенсе төркөм менән — элекке совет летчигы Иван Степанов; Велеград, Галеноквице тирәһендә хәрәкәт итеүсе өсөнсө төркөм менән — Ян Искра; Угерский Брод, Лугачовице тирәләй хәрәкәт итеүсе дүртенсе төркөм менән — Богуш; Кромежиж, Угерске Градиште янында һуғышыусы бишенсе төркөм менән Ольга Франтишкова етәкселек итә. Быларҙан тыш, Чернов, Й.Конечный, О.Новак, Иржи Пирдек, В.Пинтера, Й.Ганак, А.Петраш, Й.Якеш, Й.Генек, Й.Отиск, М.Генсерек, А.Коменда, Б.Индра, З.Михал, Я.Троян, М.Ветишка, З.Кафка төркөмдәре лә урман-тауҙарҙа партизанлыҡ иткән. Октябрь айында Моравияға “Вольфрам” төркөмө парашютсылары ла төшөрөлә — етәксеһе капитан Йозеф Отиск. Й.Отиск Ян Ушияк менән Даян Мурзинға бергәләп хәрәкәт итергә тәҡдим яһай, хатта уларға Лондондағы хөкүмәт исеменән ярҙам тип, ҙур суммала аҡса тәҡдим итә. Ушияк менән Мурзин аҡсанан баш тарта.

Ноябрҙә протекторатҡа йәшерен исеме “Фаустов” булған, юғары ойоштороу һәләте, мәғлүмәтлелеге, дисциплинаһы менән айырылып торған П.В.Федоров етәкселегендә тәүге 10 совет парашютсыһы, уның артынса М.И.Савельев командирлығындағы добровольцтар һәм концлагерҙан ҡасҡан тотҡондарҙан торған тағы ла 16 төркөм ҡушыла. Украина партизандар штабының бойороғо буйынса был төркөмдәр Моравияға үтеп инергә, дошман тылында диверсион эшмәкәрлек менән шөғөлләнергә, тиҙҙән килеп етәсәк Беренсе Украина фронтына (маршалы И.С.Конев) ярҙам итергә тейеш була. Ноябрь башында был төркөмдәр немецтарға ҡаршы ҡаты һуғыштар алып бара, ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Күп партизандар һәләк була, уларға еүеш һәм томанлы ҡыштары менән дан тотҡан Чехословакия тауҙарында һуғышыуы еңел булмай. Ҡуйы томанлы көндәрҙә ҡайһы берҙә хатта немецтар менән күҙгә-күҙ осрашҡан ваҡыттары ла була. Немецтар ҙа, партизандар ҙа шуға күрә урмансыларҙың, һунарсыларҙың ярҙамына таянған. Юғиһә, йә засадаға эләгәһең, йә аҙашаһың.

## “Татра” операцияһы: Мурзинды урмансы Ян Ткач ғаиләһе ҡотҡара

Генрих Гофмандың “Ҡара генерал” әҫәрендә (159-сы бит): “Яралы Мурзин урмансы Ян Ткач өйөнә үҙе килеп юлыға”, — тиелә. Был мәғлүмәт Брно ҡалаһы Г.Масарик исемендәге университет китапханаһында һаҡланған “1944—1945 йылдарҙа Моравияла партизандарға ҡаршы алып барылған хәрби операциялар” (2006, авторы Т.Черный) исемле диссертацияла ла, С.Тофелдың “Челадна онотороға тейеш түгел!” тигән (2011) мәҡәләһендә лә дөрөҫләнә. Д.Мурзинды ҡотҡарыусы урмансы Ян Ткачтың ҡыҙы Мирослава Ҡаштовска был хаҡта ошолай ти: “Мин Горный Бычва менән Челадна тауҙары араһында ултырған Знайка ауылында 1931 йылда донъяға килгәнмен. Һуғыш алдынан һәм унан һуңғы йылдарҙа ла тау-урмандар тулы партизан, концлагерҙан ҡасҡан кешеләр булды. Шуға беҙ бик ауыр йәшәнек. Ян Жижка бригадаһы партизандарына 1944 йылдан башлап ярҙам иттек. Гестапо партизандарға ҡаршы 13 мең һалдат ҡатнашҡан “Татра” операцияһын башлағас, беҙҙең арттан да күҙәтеү ойошторҙолар. Ғаилә именлеге ҡурҡыныс аҫтында ҡалды. Бер ваҡыт Бескид тауҙарында Эмиль Мирон тигән партизан пәйҙә булды. Миңә ул

ваҡытта 14 йәш ине. Ул әҙәм беҙҙә йыш булды, минән беҙҙә кемдәр булыуы, ниңә килеүҙәре тураһында һораша торғайны. Мин, әлбиттә, “беҙҙә бер кем дә булмай”, тип яуаплайым. Тауҙар араһында йәшәүе еңел түгел. Ҡышын мәктәпкә, докторға барыуы үҙе бер бәлә, юлдарҙы көрт баҫа. 1944—1945 йылғы ҡыш нык ҡарлы булды, шуға ҡарамаҫтан, Эмиль Мирон беҙгә эҙен һыуытманы.

Мурзин менән 1944 йылда ул үҙ төркөмө менән Склабиноға ташланғас та таныштыҡ. Англияның “Вольфрам” төркөмө парашютсылары ла беҙҙә йыш булды. Даян Мурзин менән Ян Ушияк һыуыҡ тейҙереп ауырып китһә, беҙгә килеп дауалана торғайнылар. Әсәйем уларҙың кейемдәрен йыуа, иртән таҙа простынялар, таҫтамалдар биреп оҙата. Арыған Мурзин ябыҡ ине, һаҡал йөрөттө. Ҡайһы берҙә иптәштәре менән килеп йыуыуына ла атайымдың таҙа кейемдәрен кейеп йоҡлап ала, үҙенең алмаш кейеме булманы. Улар килгәндә ишек алдында гел бер партизан һаҡта торҙо. Атайым партизандарға йәшенеп кенә он ташыны, әсәйем иһә төндәр буйына икмәк бешерҙе. Шулай ҙа икеһе лә бик ҡурҡа торғайны.

Бер ваҡыт төндә берәү тәҙрә ҡаҡты. Этебеҙ яман өрә. Атайым йүгереп тышҡа сыҡһа, Мурзин булған. Арыған, кейеме ҡанға мансылған. Өйгә индереп, яраларын йыуып бәйләнеләр, ләкин икенсе көндө иртән атайым ағаһын саҡырып, икәүләп яралыны урманға алып киттеләр. Унда тәрән итеп бункер ҡаҙып, ашарға ризыҡ ҡалдырып, яралы Мурзинды шунда йәшергәндәр.

Икенсе көндө немецтарҙың “Татра” операцияһы башланды: карателдәр барлыҡ подвалдарға тиклем тикшереп сыҡты. Шикле кешеләрҙе “партизандарға ярҙам иткәнегеҙ өсөн” тип аттылар, Брно төрмәһенә алып киттеләр. Атайымдың ике туған ҡустыһы Франтишек Ткач та ҡулға алынған. Лготска менән Горный Бычва араһында карателдәр 15 партизанды таба. Уларҙы ла беҙҙең кеүек ябай ауыл кешеләре йәшереп тотҡан булған. Атыш ваҡытында биш партизан, дүрт гестапо һалдаты үлә. Икенсе көндө Франтишек Ткачтың ҡатыны Ҡамиланы ла ике бәләкәй балаһы менән бергә ҡулға алалар. Брно төрмәһендә партизандарға ярҙам итеүҙә ғәйепләп, уларҙы ҡаты язаларға дусар итәләр. Ҡамила төрмәлә Ҡарл, Богуслав тигән ике улы менән була: Богуславҡа бер йәш, Ҡарл өсөнсө йәш менән бара ине. Ҡамила язалауҙарға түҙмәйенсә, төрмәлә аҫылынып үлә.

“Татра”операцияһы ике аҙна дауам итте, шуға атайым Мурзин янына тиҙ генә бара алманы, етмәһә, көн һайын тиерлек епшек ҡар яуып торҙо. Барһа, эҙе буйлап табырҙар ине, шуға түҙҙе. “Мурзин унда асҡа, һыуыҡҡа түҙмәйенсә үлгәндер инде”, — тип ҡайғырып, үҙе лә ауырып китте. Урманды тикшергәндә карателдәр Мурзин ятҡан бункер янында ла була, ләкин таба алмағандар. Бункерҙа Мурзин асығып ята, аяғы шешеп эренләй. Шеште ул компас һәм сәғәт быялаһы менән ярып таҙартҡан. Атайым Мурзинды, карателдәр киткәс тә, өйгә алып ҡайтып дауалай башланы. Өс аҙна тигәндә Мурзин аяғына баҫты.

Ә Эмиль Мирон Острава ҡалаһынан килгән конфидент булған, ул күптәрҙе һатты. Беҙгә, атайымды тикшереп, хатта Яңы йылда ла килгәйне.

18 ғинуарҙа Эмиль Мирон, гестаповсыларҙы эйәртеп, беҙгә ҡабаттан килде. Улар башта атайымды бик ҡаты туҡманылар, башын стенаға бәреп-бәреп алдылар. Танауынан, ауыҙынан ҡан китһә лә, атайым бер ни ҙә өндәшмәне. Гестапо һалдаттары ҡустым менән мине тышҡа ҡыуып сығарҙылар ҙа беҙҙән айырым һорау алдылар. Беҙгә кемдәр килә, атайым урманға йыш йөрөймө, кемдәр менән осраша һ.б. Беҙ: “Юҡ, бер нәмә лә белмәйбеҙ, төндә беҙ йоҡлайбыҙ, шикле кешеләр күренгәне булманы”, — тип яуапланыҡ.

Әсәйемде лә ҡулға алдылар, ул төрмәлә ике аҙна ултырып ҡайтты. Уның менән бергә ауылдарҙан алтмыш ғаилә ултырған булған, тик бик аҙҙары ғына иҫән сыҡҡан унан. Атайым менән бергә Бернатоковтар, Ҡлепаче, Ҡжиновский фамилиялы күршеләребеҙҙе лә ҡулға алғандар. Улар иҫән ҡайтһа ла, атайым ҡайтманы. Әсәйем иһә уны өҙөлөп көттө, беҙ ҙә һағындыҡ. Әсәйем иҫән ҡайтҡан күршеләрҙән: “Минең ирем ҡайҙа, уны ҡайҙа ҡалдырҙығыҙ?” — тип күпме генә һораһа ла, улар: “Юҡ инде, Анечка, һорама, барыбер белмәйбеҙ”, — тип кенә яуаплағандар. Күрәһең, атайымды язалап үлтергәндәрҙер...

Ярай әле, Алла әсәйебеҙҙе аралаған, юғиһә әсәйһеҙ ҙә, атайһыҙ ҙа ҡалыр инек. Ҡарателдәр беҙҙең өйҙө яндырғайны, һуғыштан һуң төрлө ерҙә йәшәнек. Фридек-Мнистекта, элекке немец ауылдары Увально, Крновала торҙоҡ. Әсәйем үҙенең өс балаһы өҫтөнә атайымдың ҡустыһынан ҡалған биш етемде лә тәрбиәләп үҫтерҙе.

Яуызлыҡ барыбер үҙенең язаһын ала бит ул. Бер ваҡыт әсәйем янына бик тулҡынланып Спашил исемле кеше килеп инде лә һатлыҡ йән Эмиль Мирондың тыныс ҡына йәшәп ятыуын һөйләне. Әсәйем быға бик аптыраны, ләкин юғалып ҡалманы һәм полицияға хәбәр итте. Халыҡ суды булды. Унда Э.Мировды аҫырға тигән хөкөм сығарҙылар. Был хәл 1947 йылдың 18 апрелендә булды” (Т.Черный. “1944—1945 йылдарҙа Моравияла партизандарға ҡаршы алып барылған хәрби операциялар”, Брно ҡалаһы, Г.Масарик университеты, 2006 йыл).

Мирослава Ҡаштовска 1949 йылда Зденек исемле кешегә кейәүгә сығып, өс бала тәрбиәләп үҫтерәләр. Д.Мурзин менән улар 1952, 1962 йылдарҙа Острава ҡалаһында осраша. Был хаҡта ул былай тип хәтерләй: “Әсәйем Мурзинды күргәс, шул тиклем ҡыуанды, Мурзин да әсәйемде бик оҙаҡ ҡосаҡлап, ебәрмәйенсә ҡарап торҙо. Икеһе лә саф күҙ йәштәре менән иланылар, аяуһыҙ һуғыш йылдарын хәтерләнеләр. Мурзин әсәйемде янынан бер минутҡа ла ситкә ебәрмәне, табын артында ла партизандар тормошон хәтерләп, һөйләшеп ултырҙылар, бергәләшеп бейенеләр”. Шуныһы ғәжәп: Мирослава Ҡаштовска (1931—2012) менән Мурзин (1921—2012) икеһе лә бер йылда вафат була: Мирославаға — 81-се, Даян Мурзинға 91-се йәш була...

## Тауҙарҙа барыһы ла партизан түгел

Словакия тауҙары, протекторат урмандары концлагерҙан ҡасҡан тотҡондар менән тулған була. Араларында кешелеклеһе лә, яманы ла осраған. Берәүҙәре автомат төбәп халыҡты талай, ҡатын-ҡыҙҙарҙы көсләй, өйҙәрен яндыра, икенселәре, киреһенсә, халыҡты яҡлаған. Миҫалға Вышков ҡалаһына, Рачиц ҡасабаһына яҡын ерҙә төшкән һәм командиры Н.И.Дмитриев булған “Ермак” парашютсыларын ғына алайыҡ. Чех яҙыусыһы, профессияһы буйынса юрист, тарихсы Ярослав Поспишил 1996 йылда, тарихи документтарға нигеҙләнеп, “Гиеналар” тигән китап яҙа. Ошо әҫәрҙә ул совет төркөмөн тәнҡитләй, хатта уларҙы фашистарға тиңләй. “Ермак” отрядының яуызлыҡтары хаҡында икенсе бер чех яҙыусыһы Ҡарл Рихтерҙың “Домнивали домова” (“Завоевали отечество”) исемле китабында ла әйтелә. Унда Вацлав Чермак исемле тирмәнсе былай ти: “Беҙҙе немецтар ҙа, партизандар ҙа таланы. Аптырағас, ғаиләбеҙ менән урманға ҡастыҡ. Төндә ипләп кенә ҡайтып, кейем-һалым, ризыҡ алып, йорт-еребеҙ, мал-тыуарыбыҙҙы ҡарап китә торғайныҡ”, — ти. Ысынлап та, тауҙарҙа барыһы ла ысын партизан булмаған, был турала алдараҡ әйтеп кителер әле, ә хәҙер ошондай шарттарҙа Мурзин мең ярымға еткән бригада менән нисек командалыҡ итте икән — шуға туҡталайыҡ.

Уның “Комсомольская правда” гәзитенә (2010) биргән бер интервьюһында: “Мин приказдарымды немец телендә бирҙем, ә чех, словак телдәрен һуғышта өйрәндем”, — тигән юлдар бар. Урындағы халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәрен, телен, йолаларын белеү, тәбиғәт шарттарын өйрәнеү һәм уға яраҡлаша, хатта немец овчаркалары менән немец телендә “һөйләшә” белеү ҙә уға бригада менән етәкселек иткәндә кәрәк була. Мурзинды күреп белгән, бергә һуғышҡан элекке партизандар: “Ул ҡаты ҡуллы командир ине, һиҙгер, һалмаҡ хәрәкәтле, тиҙ генә ышанып бара торған кеше түгел, факттарға ғына ышана һәм уларҙы бик нығ тикшерә, фекерен тиҙ генә әйтеп бармай, уйлап эшләй. Һөйләгәндә лә уйлап, ашыҡмай ғына һөйләй, үҙенә килгән һәр кешене, “та-а-ак” тип һуҙып әйтеп, иғтибар менән тыңлай: отрядҡа килеүсе гардист, йозефсы, власовсы йәки “Вольфрам” төркөмөнән ебәрелгән кеше түгелме?” — тип иҫкә ала. Бригадаға алыуҙарын һорап килгән һәр кешегә рөхсәт биреү еңел булмай Мурзинға. Кешеләргә тиҙ ышаныуы арҡаһында Пшеровтан И.Крал, Гранецтан В.Индрух, Липовценан А.Заухар, Свитавиҙан З.Дворжак, Брумовтан С.Прокш, Дольни Бычванан капитан В.Каланду, Ш.Краличка, К.Бублу, Я.Юрчи кеүек ҡыйыу партизандарын һәм командирҙарын юғалта. Ян Ушияк үҙе лә һатлыҡ йән Дворжак арҡаһында һәләк була бит. Бескид тауҙарындағы Чертова Млынь тип аталған ерҙә Ян Ушияк менән бергә Мурзиндың яраланыуы, артабан Ян Ткачтың үҙен дауалауы, Дворжактың ныҡышлығы, хәйләкәрлеге арҡаһында Челадьела урмансы О.Махандра өйөндә Ян Ушиякты эҙләп табып гестапоға тапшырыуы арҡаһында командирҙың үҙен-үҙе атып үлтереүе Мурзин өсөн ғүмерлек ҙур һабаҡ була. Гестапоға хеҙмәт итеүсе Туман, Гнат Пасий исемле кешеләр төндә парашютта төшкән совет радисткаларын һатҡас, ҡыҙҙарҙы язалап үлтерәләр. Ләкин һуғыш законы ла ҡаты — һатлыҡ йәндәрҙе урманда партизандар атып китә.

Һатлыҡ йәндәр араһында ҡатын-ҡыҙҙар ҙа булған, ундайҙарҙы ла күрергә тура килә Мурзинға: әле Гнибеда отрядында һуғышҡанда уҡ партизандар фашистарҙы сәскәләр бәйләме тотоп ҡаршылаған һәм һуңынан уларға тоғро хеҙмәт иткән, бик күп коммунистарҙы һатҡан бер ҡатынды аҫып китә. Ә Пинкус төркөмөндәге “Курск һандуғасы” ҡушаматлы, йыр-моңға ғашиҡ, зәңгәр күҙле, һары сәсле власовсыны берәү ҙә һатлыҡ йәндер тип уйламай ҙа. Бер ваҡыт Степанов отрядына китеп барған партизандар уның арҡаһында Чертова Млынь тигән ерҙә уйламаҫтан засадаға юлыға һәм карателдәргә эләкмәҫ өсөн барыһы ла атылып үлә. Улар араһында Володя Кучинский, радистка Александра була, Грековский менән Ефремов отрядтары был ваҡытта протекторат сигенә күсенеп өлгөрөү арҡаһында ғына иҫән ҡала. “Курск һандуғасы” барыһын да тотторол бөткәс, немецтар уның үҙен дә урманда атып китә. Шулай итеп, тауҙарҙа үҙ кешеләр араһынан сыҡҡан һатлыҡ йәндәр айырыуса ҡурҡыныс булған. Бына нимәгә алып килгән һуғыш!

Чех милләтселәре лә йоҡлап ятмаған: Грековский, Павел Куделя кеүек партизандар, мәҫәлән, милләтселәр ҡулынан һәләк була — был хаҡта Д.Мурзиндың “Дошман тылындағы фронт” исемле китабында яҡшы тасуирланған. Уның үҙен күп тапҡырҙар үлемдән һаҡлап алып ҡалған Балтика матросы Гриша ла отрядта йәшерен хәрәкәт иткән һатлыҡ йән тарафынан һәләк була бит. Сираттағы бер операцияла уға арттан аталар, ә кем атҡаны билдәһеҙ ҡала.

Бер ваҡыт Мурзинға Брнолағы мәғариф министрының халыҡтың иң яҡшы улдарын һәм ҡыҙҙарын гестапоға һатыуы, концлагерҙарға ебәреүе тураһында хәбәр килә. Командир партизандарҙы йыйып, “Дон казактары төрөк солтанына хат яҙа” тигән картиналағы хәлгә оҡшатып ултырып, министрға хат яҙалар. Күп тә

үтмәй, мәғариф етәксеһенең мәрхүм булыуы тураһында гәзиттәрҙә яҙып сығалар: баҡһаң, ул партизандарҙың үс алыуынан ҡурҡып, атылып үлгән икән.

Злин ҡалаһы хәрби гарнизоны начальнигы, чех милләтле полковник Коближек та үҙ халҡына күп ыҙалар килтерә, уның арҡаһында бригада үҙенең иң аҫыл кешеләрен юғалта. Полковник Коближек та үҙ язаһын ала: 16-сы танк дивизияһы командиры генерал фон Мюллерҙы партизандар ҡулға төшөргәндән һуң уны немецтар атып үлтерә.

Ян Ушияктың ышанысына инеп бригадаға килеп оялаған, һыуҙа батмай, утта янмай торған ялағай Франт Дворжакты иһә партизанка Павла Седлачкова атып үлтерә. Ушияк һәләк булғандан һуң Дворжакты мурзинсылар бер нисек тә ҡулға төшөрә алмай. Аптырғас, Брно төрмәһенә үҙ кешеһен ултырталар. Әйткәндәй, был алымды гестапо ла бик теләп ҡулланған икән. Дворжактың Брно төрмәһендә ултырғанда “Ҡуй железо!” тигән паролен асыҡлағас, Седлачкова һатлыҡ йәнгә ошо пароль аша сыға һәм Брнола осратып атып китә. Бик күптәрҙең башына еткән чех конфидентының яҙмышы бына шулай аяныслы тамамлана, ә ҡыҙҙы Маутхаузен лагерына ебәрәләр, Павла унан башҡа сыҡмай.

## Ольга Франтишкова — “Ян Жижка” ғорурлығы!

Алда әйтелгәнсә, партизандар араһында ирҙәр менән бер рәттән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа һуғышҡан, ҙур батырлыҡтар күрһәткән. Бригадала батыр ҡатын-ҡыҙ партизандарҙың иң сағыуҙары Злин гестапоһынан Мурзинға мәғлүмәттәр еткереп тороусы Марта, радистка Лида, Надя Ермакова (аҙаҡ Д.Мурзиндың ҡатыны), Милка Чешкова булған.

Бригадала ҡыйыулығы менән айырылып торған ҡатын-ҡыҙ командалыҡ иткән берҙән-бер “Ольга” исемле отряд та була: ул генерал Мюллерҙы тотоуҙа ҙур батырлыҡ күрһәтә.

Ольга Франтишкова — Ҡарпат аръяғында тыуып үҫкән һары сәсле, зәңгәр күҙле сибәр ҡыҙ, милләте буйынса русин, хәлле ғаиләлә тәрбиәләнгән. Атаһы ресторандар тотҡан. Ольга рус, украин, чех, венгр, словак телдәрендә иркен һөйләшкән. Немец фашистарына ҡаршы нәфрәт тойғоһо уны Степанов отрядына килтерә. Был һылыу ҡыҙҙы, әлбиттә, береһе лә партизан тип уйламай. Артабан Ушияк, Мурзин менән тығыҙ аралаша, уларға гестапо пландарын еткереп тора. “Ольга” отряды Немоховицы ауылында Поспишил тигән фамилиялы кешенең өйөндә йыйылыша. Улар табылған ҡоралды Поспишилдың өйөндә йәшереп, ҡар баҙында яралылар өсөн госпиталь әҙерләй. Отрядта Германияға концлагерға ебәреүҙән ҡасып йөрөүсе Ҡаменный, Йозеф Бартош, ошо ауылдан Брженек Швейдлер, Руда Венгуда, Бранковицы ауылынан Милан Диас, Бухловицынан Йозеф Малинка тигән кешеләр, хатта Омск ҡалаһында тыуып үҫкән Тимофей Гончаров исемле егет тә була. Улар барыһы ла тыуған илгә тоғро хеҙмәт итергә, фашист илбаҫарҙарын аяуһыҙ ҡыйратырға, фашистарға тереләй бирелмәҫкә тип ант итә.

Отрядтың тәүге заданиеһы — урмансыларҙың ҡоралын тартып алып, Лиза ауылында йәшәүсе, немецтар яҡлы Шимон байҙы үлтереү була. Артабан улар “Алтын болан” курсаулығында полицияға ҡаршы бәрелештә дүрт жандармды үлтерә, тик Иржи Ировский тигән иптәштәре гестапо ҡулына эләгә. Партизанға гестапоға тереләй бирелеү — үлем менән бер. Зыканов исемле власовсы Ировскийҙы аяуһыҙ язалай, шулай ҙа егет берәүҙе лә һатмай.

Артабан отряд немецтарҙың ҡорал тейәлгән бер нисә вагонын юҡ итә, 34 цистернаһын шартлата. Был хаҡта Г.Гофмандың “Ҡара генерал” китабында:

“Көн һайын элемтәселәр Ян Жижка бригадаһы штабына айырым отрядтарҙан докладтар, хәбәрҙәр килтереп торҙо. Ә Мурзин менән Степанов уларҙы үҙҙәре ҡабул итте. Совет ғәскәрҙәре Венгрияны азат итте, немецтарҙы Словакияның баш ҡалаһы Братиславанан ҡыуҙы. Партизандар дошманға ҡаршы һөжүмде көсәйткәндән-көсәйтә бара, хәҙер Мурзин быңдай хәбәрҙәрҙе тыңларға күнегеп тә китте инде. Ләкин уны “Ольга” отрядының немец генералы фон Мюллерҙы эләктереүе тураһындағы хәбәрҙе ишетеү ғәжәпләндерҙе лә, ҡыуандырҙы ла. Киевҡа был турала ашығыс хәбәр ебәрелгәс, бер нисә сәғәттән маршал Малиновскийҙан яуап килде. Ул партизандарға оло рәхмәт белдергән һәм Мюллерҙы ашығыс рәүештә “Оло ергә” ебәрергә тәҡдим иткән. Тап шул осорҙа Степанов етәкселегендәге икенсе батальон Мурзин штабы менән бергә Голешов районындағы урмандарға күскәйне. Бында, Луковечки ауылы эргәһендә, партизандар немец генералын алырға киләсәк самолет өсөн уңайлы ялан тапты. Ә генерал-майорҙы үҙҙәре менән алып йөрөгән “Ольга” отряды Луковечки ауылынан йөҙ саҡырым самаһы ерҙә ине әле. Ян Жижка исемендәге бригада командованиеһының уйлауынса, немец формаһындағы бер төркөм партизан, санитар машинаһына ултырып, “Ольга” отряды менән осрашыу билдәләнгән урынға килергә лә, дарыу биреп йоҡлатылған һәм танымаҫлыҡ итеп бинт менән сырмалған генералды Мурзин янына илтергә тейеш” (261—262 биттәр).

Совет ғәскәрҙәре Велеградты азат иткәс, “Ольга” отряды ла совет яугирҙары менән бергә ҡалаға бәреп инә. Әсирлеккә эләккән генералды урмандағы йәшерен бункерҙан совет командованиеһына тапшырыу өсөн бында алып киләләр. Мюллер бик борсола, үҙен Англия йәки Америка армияһы ҡарамағына тапшырыуҙы үтенә. (Даян Мурзин “Ватандаш” журналының 2005 йылғы 5-се һанында генералды отрядтағы лётчиктар — инглиздәр һәм америкалылар ҡулға эләктереүе хаҡында әйтеп үтә. Отрядта 2 америкалы, 5 инглиз лётчигы һәм 1 совет лётчигы була. Улар Лондон менән радио бәйләнешенә сығып, Дрезден ҡалаһын, Румынияның Плоешти ҡалаһындағы нефть эшкәртеү заводтарын бомбаға тотҡан саҡта метеосводкалар биреүҙе ойоштора. Совет летчигын һуғыштан һуң 10 йылға лагерҙарға оҙаталар һәм Д.Б.Мурзин уны таба алмай). Ләкин Мурзин Мюллерҙың һәм инглиз, америкалыларҙың теләген кире ҡаға. Ә был ваҡытта Гитлер Отто Скорцениға Мюллерҙы нисек тә табырға һәм азат итергә йә атып үлтерергә ҡуша. Велеградҡа Икенсе Украина фронты штабынан — маршал Малиновскийҙан кешеләр килә һәм Мюллерҙы самолетта “Оло ергә” оҙаталар.

О.Франтишкова Мурзиндан үҙен командирлыҡтан алыуҙарын үтенә, урынына Пепек тигән чехты командир итеп ҡуялар. Ир кеше командалыҡ итә башлағас, ун кешенән генә торған отрядҡа яңы кешеләр килә башлай. Отряд бер урында оҙаҡ тормай, Кромежиж, Вышков райондарында, Хржиб тауҙарында хәрәкәт итә.

“Ольга” отряды хаҡында исеме алда телгә алынған чех яҙыусыһы Ярослав Поспишил “Гиены” исемле китабының “Гиены в акции” бүлегендә Ольга Франтишковаға “Ике йөҙлө ҡатын, гестапоға хеҙмәт иткән, генерал Мюллерҙың һөйәркәһе булған” тигән ғәйептәр ташлай, Плоштинала, Прловта, Лесков, Высоке Поле, Вожаковы, Лидице, Лежаки, Ягожичка ауылдарының яндырылыуы ла уның арҡаһында, тип тәнҡитләй (Я.Поспишил. “Гиеналар”, 123 бит). Ләкин Франтишкова Ян Жижка исемендәге бригаданың ғына түгел, ябай халыҡтың да ғорурлығы булған — башҡа авторҙар шулай яҙа.

## Ике ут араһында...

Протекторат полицайҙары хаҡында ла әйтеп китәйек: улар Мурзинға ярҙам иткәнме, әллә тик гестапоға ғына хеҙмәт иткәнме? Улар ике ут араһында ҡалған: эске эштәр министрлығында эшләгән полицайҙарҙың барыһы ла немец сәйәсәтен яҡламаған, һәм был турала бик күп һөйләргә мөмкин булыр ине. Әгәр полиция хеҙмәткәрҙәре тик фюрерға ғына хеҙмәт иткән тиһәк, был меңәрләгән кешеләрҙең намыҫына тап төшөрөү булыр. Әлбиттә, полицайҙар араһында гестапоға һатылып көн иткәндәре лә етерлек булған, һуғыш тамамланғас, улар барыбер хөкөм алдына баҫҡан. Шундайҙар араһында полковник Ҡоближек, Урбанек, Ҡрайгер, Рашка, Голцхейер, Ҡохлер, Геннинг кеүек аяуһыҙлығы менән айырылып торған кешеләр булған. Злин гестапоһына хеҙмәт итеүсе полковник Ҡоближек, мәҫәлән, бик күп партизандарҙы һәләк иткән. Ольга Франтишкова отряды Мюллерҙы боронғо замокта эләктергәс, немецтар Ҡоближекты ҡулға ала — һатлыҡ йән атыуға хөкөм ителә. Урбанек яуызлыҡтары өсөн һуғыштан һуң аҫыуға хөкөм ителә, Ҡрайгер иһә Совет Армияһы һәм Ян Жижка бригадаһы Злинға ингәс, Будапештҡа ҡасып китә, ләкин тотола һәм һуңынан үлем язаһына хөкөм ителә.

Ләкин ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, азатлыҡ өсөн көрәшкән һәм партизандарға ярҙам ҡулы һуҙған полицайҙар ҙа күп булған, шулар араһындағы Ярослав Дурдик исемле полиция хеҙмәткәрен чехтар бөгөн дә онотмай. Уның үҙен дә, ғаиләһен дә гестапо даими тикшереп торған. Дурдик Злин, Всетин, Зубжи, Горный Бычва, Валах, Бистрица, Гошталков ҡалаларындағы күп нәмәләргә күҙ йомоп, Ян Жижка бригадаһына мәғлүмәттәр ебәреп тора. Был ҡалаларҙа эшләүсе Ярослав Нечаев, Йозеф Седлтаеров, Антонин Веверков, Ян Журек, Инджих Важинков, Эмануэль Жегожови исемле полицайҙарҙы гестапо төрмәгә бикләй, улар барыһы ла үлем язаһына тарттырыла. Төрмәгә бикләнгән йөҙәрләгән полицайҙар араһынан һуғыш тамамланыуға тик бер кеше — Ян Журек ҡына иҫән ҡала. Һуғыштан һуң ул ошондай иҫтәлектәр менән бүлешә: “1945 йылдың мартында Гошталковҡа Всетин гестапоһы шылтыратты. Оберштурмбанфюрер Питрихты һорап. Уның аша немецтарҙың Мурзин бригадаһы хәрәкәт иткән Гошталков, Трояк, Тесак тирәһендә партизандарға ҡаршы ҙур облава ойошторорға йыйыныуы билдәле булды. Телефондан һөйләшеү тамамланғанын саҡ көтөп алдым. Минең төшкө аш өсөн бүленгән ярты сәғәт буш ваҡытым бар ине. Ян Жижка бригадаһына ҡурҡыныс янай! Һис кисекмәҫтән был хаҡта хәбәр итергә кәрәк! Мөмкин тиклем тиҙерәк эшләргә кәрәк был эште! Ҡыҫҡаһы, Степановҡа сыҡтым. Уға: “Иван, хәҙер партизандарға мин хәбәр иткәнде гестапо барыбер беләсәк, алығыҙ мине үҙегеҙ янына!” — тип инәлдем. Ә ул: “Хәҙергә үҙ урыныңда ҡал, һин беҙгә кәрәкһең”, — тип яуапланы.

Гестапо планлаштырған операция барып сыҡманы. Ә икенсе көндө беҙгә гестапо һалдаттары килде һәм мине ҡулға алдылар. 20 апрелгә тиклем төрмәлә ултырҙым, көн һайын үлем көттөм. Ләкин миңә бәхет йылмайҙы. Всетин мәктәбендә Франтишек Найне исемле уҡытыусым бар ине, ул миңә бик яҡшы характеристика яҙып, халыҡтан ҡултамғалар йыйып, мине сығарыуҙарын юллап йөрөгән. Быларҙы мин төрмәнән сыҡҡас ҡына белдем” (Я.Поспишил, “Гиеналар”, 51-се бит).

## Визовицыла кемдәр дауаланған?

Визовицы ҡалаһы медиктары ла Ян Жижка бригадаһына даими ярҙам итеп торған. Мурзин үҙе лә бер нисә тапҡыр ошо дауаханала булған, ләкин унда гестапо агенттары эшләгән. Гестапо шик төшкән врачтарҙы шунда уҡ атҡан йәки

концлагерға ебәргән. Шуға күрә Визовицы дауахананы врачтары партизандарҙы йәшерен рәүештә дауалаған. Олджих Блага исемле врач, мәҫәлән, партизандарҙы дауаларға төндә саңғыла йөрөгән. Ошо уҡ дауахананан Франтишек Блага "Мәрхәмәтле ағалы-энеләр" монастырында яралы партизандарҙы йәшереп дауалай. Уны гестапо ҡулға ала, ләкин ғәйебен иҫбатлай алмайҙар. Ҡыйыу Визовицы врачы 1971 йылда ғына мәрхүм була.

...Бер ваҡыт Визовицы дауахананына ҡаты яраланған Гриша исемле совет партизанын алып киләләр. Бер сәғәт үтеүгә дауахананы утыҙлап немец автоматчиктары уратып ала. Гришаны төндә урманға алып китеп өлгөрәләр. Шунда асыҡ һауала операция яһайҙар. Дауаланып аяҡҡа баҫҡас, совет партизаны Гриша Плоштинолағы Михал Слепцов төркөмөнөң командир ярҙамсыһы булып китә. Прловта карателдәр менән булған ҡаты алышта командир капитан Василь Резнички ҡаты яраланғас, уны ла Визовицыға алып киләләр. Тик был юлы ла кемдер гестапоға еткереп өлгөрә. Гестапо кешеһе килгәнсе, яралы Василде лә врачтар тиҙ генә урманға алып китә.

1945 йылдың 22 февралендә Клоубоук ҡалаһында отряд командиры Саша Котляров яралана. Уны ла Визовицыға алып киләләр. Тап шул ваҡытта дауаханаға: "Мин махсус рәүештә партизандарға ярҙам итергә килдем, нисек итеп Ян Жижка бригадаһын эҙләп табырға икән?" — тип һорашып йөрөгән гестапо конфиденты пәйҙә була (Я.Поспишил, "Гиеналар", 338—339 биттәр). Ҡаты яраланған партизанды Визовицынан алыҫ түгел Уезде ҡалаһы побының подвалында дауалай башлайҙар. Ошо хәл тураһында шул ваҡытта Визовицыла эшләгән медицина фәндәре докторы Франтишек Лапише партизандарға ярҙам иткән врачтарға арналған "В белом..." тигән иҫтәлектәрендә былай тип яҙған: "Капитан Котляровты беҙ Лесковицы ҡалаһына яҡын Южичков Млынь тигән тирмән бункерында дауаланыҡ. Сашаға Олджих Блага исемле врач операция эшләне. Гестапо О.Благаны бер генә минутҡа ла яңғыҙ ҡалдырманы, партизандарға ярҙам итә, тип яла яҡтылар. Аптырағас, ул бөтөнләйгә Ян Жижка бригадаһына китте. Ләкин 1945 йылдың 4 апрелендә барыбер гестапо ҡулынан һәләк булды. Артынан күҙәтеү ҡуйылған булған икән: Лесковицы бункерына ингән О.Благаны гестаповсылар уратып ала һәм ике арала атыш китә. Йәмғеһе 9 кеше һәләк була унда: бишәүһе — тирмәнсе Южичка ғаиләһе ағзалары, дүрт партизан менән ҡуша Саша Котляров та тиңһеҙ алышта һәләк була. О.Благаны терелэй алырға бойороҡ бирелә, шуға уның яурынын ғына яралайҙар. Ҡулында ҡорал тота алмағас, Олджих гестапо ҡулына эләгә. Уның ҡулдарын бәйләп, "башҡаларға һабаҡ булһын" тип, Злин, Угерски Градиште, Мирошов, Пльзень ҡалалары буйлап язалап йөрөтәләр. Ҡаты язаларға түҙмәйенсә, ҡыйыу врач һәләк була.

1945 йылдың 23 апрелендә гестаповсылар Валахска Мезиречи ҡалаһында халыҡтың өйҙәрен яндырып, кешеләрҙе үлтереп, этлек ҡылып йөрөй. Бик күп кешеләрҙе язалайҙар. Улар араһында ябай халыҡҡа медицина ярҙамы күрһәткән врачтар ҙа була. Тик 1945 йылдың апрель-май айҙарында ғына Лесковицы ҡалаһында — 9, Плоштинола — 24, Визовицыла — 2, Прлов, Вожаковта 21 кеше атыла һәм аҫыла.

Ян Жижка бригадаһы партизандарына Көньяҡ Моравия халҡы ла ҡулдан килгәнсә ярҙам иткән. Совет яугирҙары азат иткән Бланско окрестына (районына) ҡараған Слоуп ҡасабаһында йәшәүсе врачтар династияһынан Людмила Лангер бөгөн дә иҫән. Һуғыш ваҡытында уға һигеҙ йәш була. Ғаиләне, һеҙҙә йәһүд ҡаны бар, тип саҡ-саҡ концлагерға оҙатмайҙар. Был хаҡта 78 йәш менән барған

врач былай тип хәтерләй: “Концлагерҙан ғаиләбеҙҙе шәжәрәбеҙ ҡотҡарҙы. Әсәйем гестаповсыларға шәжәрәбеҙҙе сығарып күрһәткәс, улар бик аптыраны ла: “Һеҙҙә немец ҡаны ла бар, ни эшләп бында ултыраһығыҙ?” — тинеләр. Ысынлап та, атайым яғынан немецтар, әсәйем яғынан йәһүдтәр, румындар, ике өләсәйем яғынан украин, поляк ҡаны ла бар нәҫелебеҙҙә. Шулай ҙа әсәйем аптырап ҡалманы, гестапо тикшереүсеһенә: “Бер ҡайҙа ла китмәйбеҙ, мин немка түгел, күптән чехлашып бөткәнбеҙ инде”, — тип яуапланы. Гестаповсылар сығып китте. Беҙгә теймәнеләр.

Беҙҙең йортобоҙ өс ҡатлы. Тәүге ҡатында атайым ауырыуҙар ҡабул итте, яралыларҙы дауаланы. Атайыма гестапо һалдаттарын да дауаларға тура килде, уға, бәлки, шуның өсөн дә теймәгәндәрҙер ҙә. Йәшенеп кенә ул партизандарға ла ярҙам итте: медикаменттар ебәрә торғайны, ауырыуҙар ҡабул итте һәм бының өсөн аҡса алманы. Немецтар ҡайһы саҡта беҙгә төшкө ашҡа килә торғайны. Мин әсәйемә ит, әсе кәбеҫтә менән кнедлики әҙерләргә ярҙамлашам, һауыт-һаба йыуам, өй йыйыштырам, атайыма ла ярҙам итәм һәм барыһын да ишетеп-күреп йөрөйөм.

Бер ваҡыт төшкө аш ваҡытында автоматтар менән ҡоралланған бер төркөм гестаповсылар килеп инде. Ҡурҡышып киттек. Атайым уларҙы өҫтәл янына саҡырҙы. Шунда бер гестаповсы автоматын стенаға һөйәне лә, минең пианинола уйнағанды күреп, уйнарға рөхсәт һораны. Атайым ризалығын белдереп баш ҡаҡҡас, гестапо һалдаты Польша гимнын уйнап ебәргәйне, барыбыҙ ҙа шаҡ ҡаттыҡ! Атайымды ҡулға алырға килгәндәр икән, тип ҡурҡҡайныҡ, немецтарға хеҙмәт итеп йөрөүсе поляктар ғына булып сыҡтылар былар. Алты йылға һуҙылған һуғыш осоронда күптәр шулай милләтен йәшереп, немецтарға һатылды, гестапола хеҙмәт итте. Бер нисә көндән ҡасабалағы халыҡты йыйып, костел ҡаршыһында ике партизанды аҫтылар. Майҙанға мин өләсәйем менән килгәйнем, ул мине, күрмәһен, ҡурҡыр, тип плащының ҡырыйы менән күҙҙәремде ҡаплаһа ла, партизандың аяҡтары тартышҡанын барыбер күрергә тура килде. Мин был хәлде олоғайған көндә лә онотмайым”.

## “Удавачтар”, “гардистар” һәм “йозефсылар”...

Һуғыш йылдарында Көнбайыш һәм Көньяҡ Словакияла хәрәкәт итеүсе һатлыҡ йәндәрҙең бер төркөмөн “гардистар” (немец ҡаны ҡатыш чехтар һәм словактар), йәки “Глинков гардистары” тип атағандар. К.Франк етәкселегендә әҙерлек үткән ялған партизандарҙы “удавачтар” (былары урындағы һатлыҡ йәндәр) тип атағандар, “йозефсылар” хаҡында иһә һүҙ алдараҡ буласаҡ. Упорски тауы итәгендә урынлашҡан ауылдар янында мурзинсылар менән глинковсылар араһында ҡаты һуғыштар була. Мурзин бригадаһына 500 партизандан торған Егоров отряды ҡушылғас, бригаданың һаны меңдән ашып китә. Партизандар СС һәм 154-се пехота дивизияларына, Глинков гардистарына ҡаршы Бәләкәй Карпат, Аҡ Карпат тауҙары өлкәһендә ауыр һуғыштарҙа ҡатнаша. 1944 йылдың августа Ваг йылғаһының уң ярында булған һуғыштарҙа Ян Жижка партизандары ҙур юғалтыуҙар кисерә.

Партизандар хәрәкәтенең әүҙемләшеүе протекторат етәксеһе К.Франкты тәрән уйға һала. Проблеманан сығыу юлын ул Ян Жижка бригадаһына үҙ кешеләрен индереүҙә күрә: улар араһында Франц Брин, Большой Франта, Шмидт ҡушаматтары менән йөрөгән Франт Дворжак, полковник Коближек, Олджих Батя иң ҡурҡыныс гестапо разведчиктары иҫәпләнә. Йә Ҡаршылыҡ күрһәтеү көстәре штабы вәкиле, йә Чехословакия коммунистар партияһы ағзаһы булып, ялған

документтар эшләтеп, махсус әҙерлек үткәндән һуң улар “ялған партизандар”ға әйләнеп, Ян Жижка бригадаһына килеп оялай. Бригаданың иң аҫыл партизандары Грековский, Долинов, Жуков, командир Ян Ушияк ошо һатлыҡ йәндәр арҡаһында һәләк була. Протектораттың ауыл, ҡала, ҡасабаларында Мурзиндың, Ушияктың фотолары ла эленеп тора, тик тотоп биреүселәр генә табылмай. Ә бит, уйлап ҡараһаң, бригадала уларҙы кемдер фотоға төшөргән? Тик кем? Был һорауға яуап табыуы хәҙер бик ҡыйын. Шундай фотоларҙың береһен, мәҫәлән, гестапо конфиденты Дворжак алып килә һәм Мурзин менән Ушияҡҡа: “Бында һеҙҙе тере килеш тотоп биреүсегә Гитлер бик ҙур аҡсалар тәҡдим итә”, — ти.

Тауҙарҙа ялған партизандарҙы ысын партизандарҙан айырыуы үтә лә ҡыйын булған. Документы буйынса кеше партизан һаналған, ә бына уның эсенә кем инеп ҡараған? Командир Ян Ушияктың ышанысына инеп, уның үлеменә сәбәп булған Дворжак хаҡында ни беләбеҙ һуң?

...Бригадаға килгәндең тәүге көнөнән башлап Дворжак Мурзинға ҡиәфәте, кешенең күҙенә ҡарап һөйләшмәүе менән оҡшамай. Тик ни эшләптер Ушияк уға башкөллө ышана һәм серҙәрен йәшермәй, хатта Мурзинға: “Һәр кешелә һин, братр (туған), дошман күрәһең”, — тип ризаһыҙлыҡ белдерә. Бер-береһе менән килешеп эшләгән ике командирҙың дуҫлығы, үҙ-ара ышанысы Мурзин Дворжакты ялған задание биреп тикшергәндән һуң ҡаҡшай төшә. Үҙенең тиҙҙән һәләк булырын һиҙмәгән Ушияк үлеменә бер көн ҡалғас ҡына, Мурзинға әйтмәйенсә, Дворжакты “йәнәһе лә, Прага коммунистары менән осрашыуға” ебәрә. Икенсе көндө Дворжак Княгиня тауына Ушияк менән Мурзиндың фотоһы ҡуйылған иғланды йыртып алып ҡайта. Унда: “Ян Жижка бригадаһы командирҙары Мурзин менән Ушияктың башы өсөн 100 мең рейхс-марка тәҡдим ителә”, — тип яҙылған була. Дворжак: “Мин Прагалағы йәшерен үҙәк етәкселәре менән осраштым, улар иртәгә һеҙҙең менән осрашырға килә”, — тип, икенсе көндө иртән Ушияк менән Мурзинды осрашыу билдәләнгән урынға алып китә. Мурзин эске һиҙемләү менән засада булыу мөмкинлеген аңлай, шуға күрә үҙе менән алты автоматчик ала. Тейешле урынға килеп еткәс, Дворжак әйткән кешеләр артында баштан-аяҡ ҡоралланған гестапо һалдаттары күренә. Ике арала атыш китә. Дворжак һеләүһен етеҙлеге менән ситкә тайпылып, соҡорға тәгәрәй, ә Мурзин менән Ушияктың аяғына аталар. Немецтар уларҙы шулай тереләй ҡулға төшөрөргә тырыша. Фашистар бригада штабын, бункерҙы шартлаталар, немецтарҙың баҫып килеүен көтмәгән партизандар һәләк була. Лагерҙан китер алдынан отрядҡа: “Әгәр һөжүм итә ҡалһалар, Степанов янына Злинға китегеҙ”, — тип бойороп өлгөрә Мурзин, ә үҙе унда барып етә алмай. Карателдәр бригада бункерын ҡыйратып, унда ҡалған партизандарҙы үлтереп киткәндән һуң, урман тынғас, бәләкәй генә бер тау йылғаһындағы күпер аҫтына төшөп ята һәм аңын юғалта.

Мурзин менән Ушияк тау йылғаһына һикерә, тик яралы ике командир икеһе ике яҡта тороп ҡала: Мурзин ағып китә, Ушияк ярға эләгеп ҡала. Дворжак уны Урта Бычва ауылында табып ала һәм, Тау Челандаһына дауаларға алып барам, тип алдап, гестаповсыларҙы алып килә. Шунда Ушияк тереләй бирелмәҫ өсөн атылып һәләк була — был хаҡта алдараҡ ҡыҫҡаса әйтеп киткәйнек инде.

Ләкин тауҙарҙа бөтә немецтар ҙа фашист, бөтә рустар ҙа каратель власовсы булмаған. Бригадала немец антифашистары ла һуғыша, хатта Мурзин уларҙан айырым отряд төҙөй. Әгәр бригадаға: “Беҙ концлагерҙан ҡасҡан немец антифашистары”, — тип үтенеп килеүсе яңы кешеләр булһа, уларҙы Чехословакия-Германия сигендәге Терезин концлагерынан ҡасҡан немецтарға күрһәткән. Үҙ

сиратында улар командирға “яңы партизандар”ҙың кем икәнлеген тиҙ арала асыҡларға ярҙам иткән.

Брнола Мурзинға, ҡатыны чех милләтле булыу сәбәпле, карьера яһай алмаған немец майоры Йозеф Гюбнерҙың үҙ теләге менән ярҙам иткәнлеге билдәле. Ул Мурзинға даими рәүештә ҡиммәтле мәғлүмәттәр ебәреп торған. Һуғыш тамамланыр алдынан Мурзин яҡларға вәғәҙә итһә лә, немец быға ышанмай: “Барыбер советтар Себергә һөрәсәк”, — тип атылып үлә. Мурзин һуғыштан һуң Гюбнерҙың водителе антифашист Ганс Ҡох менән дә осраша. Уларҙың һуғыштан һуңғы тәүге һәм һуңғы күрешеүҙәре аяныслы тамамлана: Германияға ҡайтып барғанда Г.Ҡохтың машинаһы серле рәүештә яр аҫтына ҡолай.

Һуғыш алыҫайған һайын уның менән ҡыҙыҡһыныу ҙа арта бара. Күптән түгел Америка киностудияһы 2001 йылда төшөргән “Партизаны Бельште” тигән Югославия партизандары хаҡындағы кинофильмды күрһәтте. Урман-тауҙарҙағы Югославия партизандарын, унда һуғышҡан немецтарҙы, партизандарҙың бер төркөм йәһүдтәрҙе һаҡлап һуғышыуын күрһәттеләр. Шундағы бер эпизод йөрәккә уйылып ҡалды: үҙен партизан итеп алыуҙарын һорап килгән немец антифашисын йәһүдтәр язалап үлтерә, ә партизандар быға күҙ йома. Күрәһең, һуғыш ваҡытында йәһүдтәрҙә немецтарға ҡарата үс алыу тойғоһо шул тиклем көслө булған, улар хатта үҙҙәрен яҡларға килгән немецты ла аямаған. Был факт та, минеңсә, уйландырырға тейеш.

## Плоштино трагедияһы “йозефсылар” намыҫында

Протекторат һәм Словакия тауҙарында партизандарҙы эҙәрлекләп, ҡырып йөрөүсе бер төркөм һатлыҡ йәндәрҙе “йозефсылар” тиҙәр. Төркөм менән СС штурмбанфюреры Эрвин Хафенштайн етәкселек иткән. 1945 йылдың яҙында ул 600 кешенән торған яңы каратель отряды ойоштора. Отряд менән СС оберштурмбанфюреры В.Павловский етәкселек иткән. Павловский халыҡтан ысын исемен йәшереп, “Йозеф” булып йөрөй, шуға карателдәр отрядын “йозефсылар” тип йөрөткәндәр.

Йозефсылар ҡанһыҙлығы менән айырылған: юлында осраған берәүҙе лә аямаған, шуға уларҙан барыһы ла уттан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡҡан. 1945 йылдың апрелендә йозефсыларҙың Велке Ҡарловицы ҡалаһы районында Ян Жижка бригадаһын юҡ итеү буйынса каратель операцияһы башлана. Отрядтың бер төркөмө мурзинсылар тупланған Визовицы ҡалаһы йүнәлешендә хәрәкәт итә. Бригаданың яҙмышы ҡыл өҫтөндә ҡала. Ҡарателдәр тауҙарҙа һәр төбәкте махсус өйрәтелгән овчаркалар ярҙамында тикшереп сыға, шиклеләрҙе ҡулға ала, язалап үлтерәләр.

“1945 йылдың 19 апрелендә отряд 180 кешенән торған өс төркөмгә бүленеп, Плоштино ауылын уратып ала һәм, төйөнсөктәрен күтәреп ауылды ташлап китергә йыйынған халыҡты өс яҡтан уратып алып, яңынан ауылға ҡыуып индерә. Юлда ирле-ҡатынлы Рандловтарҙы, Порлдедлдарҙы атып китәләр. Ауылды яндырғандан һуң халыҡты бер янған өйгә ҡыуалап индерәләр. Унда 1 ҡатын, 23 ир була. Уттан сығырға маташыусыларҙы автоматтан атып үлтерәләр. Үҙҙәрен ҡарғаусы халыҡҡа карателдәр: “Һеҙ партизандарҙы йәшергәнһегеҙ, беҙгә хәбәр итмәгәнһегеҙ, язаны шуға алдығыҙ!” — тип ҡысҡыра. “Йозефсылар”ҙың бер операцияһы ла овчаркаларһыҙ үтмәгән: эттәр менән эшләү күпкә еңел булған, ә урманға овчаркаларһыҙ барыу хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Плоштинола өйрәтелгән овчаркалар төркөмөнә етәкселек итеүсе чех милләтле надпоручик Доминик айырыуса ҡанһыҙлыҡ күрһәтә: башта ул кешеләрҙең ҡулын бәйләтеп,

овчаркаларҙан талата, шунан уларҙы янған өйҙәргә ташлайҙар" (Я.Поспишил, "Гиеналар", 119-сы бит).

"Йозефсылар" Плоштинала партизандар булыуы, халыҡтың уларға ярҙам итеүе, теләктәшлек күрһәтеүе хаҡында "удавачтар" аша белгән. Был ваҡытта Плоштинала Ян Жижка бригадаһы партизандары булмай, улар китеп өлгөрә, ә ауылда ҡалған бәләкәй генә партизан төркөмө тиңһеҙ алышта һәләк була. Ошо хәлде бейек тау түбәһенән күҙәтеп торған партизандар Франтишек Куделя, Володя, гестапола эшләүсе партизанка Марта ғүмерҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, халыҡты алдан иҫкәрткән була, тик халыҡтың оҙаҡ ҡуҙғалыуы, кейем-һалымын, аҙыҡ-түлеген, бала-сағаһын әҙерләп, малтыуарын бикләгәнсе байтаҡ ваҡыт уҙа... Һәм бындай өмөтһөҙ ситуацияла партизандарға сигенеүҙән башҡа сара ҡалмай. Һуғыштан һуң "йозефсылар" үҙ язаһын ала, гестапо конфиденты О.Батяны үҙ халҡына эшләгән яуызлыҡтары өсөн үлем язаһына хөкөм итәләр.

Эттәр партизандарға ла кәрәк булған, әммә уларҙы ҡулланмағандар. Бер ваҡиғаға бәйләп, сәбәбен аңлатып китәйек. Бер ваҡыт партизандар урманда аҙашып ҡалған немец овчаркаһын табып ала. Уға Ральф тип исем ҡушалар. Бер партизан уны гел үҙе менән йөрөтә, яҡшы өйрәтелгән эт немец һәм чех телдәрендә бирелгән командаларҙы яҡшы аңлаған. Тауҙарҙа Ральф күп тапҡырҙар партизандарҙы ҡотҡара, ләкин сираттағы бер операцияла элекке хужаһын танып ҡалып, немецтар яғына ҡаса һәм карателдәрҙе партизандарҙың эҙенә төшөрә. Үҙҙәрен эт ярҙамында эҙәрлекләп килеүсе карателдәрҙән партизандар Ральфты ағыулы ит ашатып үлтергәс кенә ҡотола. Бер эт арҡаһында партизандарға базаларын ташлап, икенсе урынға күсеп китергә тура килә — ә был планлаштырған операцияларҙы билдәһеҙ ваҡытҡа кисектерергә мәжбүр итә.

"...Әгәр Ральфты үлтермәһәк, белмәйем, иҫән ҡалған булыр инекме икән? — тип хәтерләй был хаҡта һуңынан отряд командиры Карел Бубеничка. — Бригада Гостинска, Всетин түбәләрендә, Бескид, Морава тауҙарында 1944—1945 йылдарҙа бик күп яуаплы операцияларҙа, шулай уҡ "Тесак", "Өс таш"та ҡатнашты. Беҙҙе һәр төркөмө 220—250 кешенән торған "йозефсылар" даими эҙәрлекләп торҙо. Бер бәрелештә дүрт иптәшебеҙҙе юғалттыҡ: берәүһе — атыш ваҡытында, икәүһе ҡамауҙа ҡалып үлде, дүртенсеһе Голый түбәһендә һуғышҡанда һәләк булды".

"1944—1945 йылдарҙың ҡышы ауыр һәм ҡарлы булды. Ҡайҙа баҫһаң да, "Ахтунг, партизанен!" тигән яҙыуҙар эленгән, буш урамдар... Халыҡ урамға сығырға ла ҡурҡа, ҡайҙа ул утынға барыу! Яңы яуған ҡарҙа эҙ ҡалдырып уҙҙыңмы, артыңдан карателдәр килеп етеүен көт тә тор, гестапо ялсылары буранда йоҡлап ятмай!

Беҙҙең бункер Чернява тауы итәгендә урынлашҡайны. Партизандар араһында Русавегожанскстан Мозолов тигән ғаилә лә бар ине. Бәләкәй балалары ла, оло йәштәге ике әбейҙәре лә эйәргәйне. Бабайҙарын концлагерға алып киткәс, улар ауылдан ҡасып, урманға сығып киткән, — тип яҙа Я.Поспишил. — Ә Мозоловтарҙың партизан булып китеүе уларҙың Мурзин менән яҡындан танышыуына бәйле. Гестапо тауҙарҙағы һәр өйҙө көслө күҙәтеү аҫтында тотоуға ҡарамаҫтан, Мозоловтар һарай янындағы тиҙәк өйөмө аҫтында партизандар өсөн бункер ҡаҙып, яралыларҙы дауалаған. Бер ваҡыт уларға гестапо кешеләре килә, хатта төнгөләккә йоҡларға ҡалалар.

Икенсе юлы Мозоловтар ғаиләһенә ниндәйҙер “удавач”тың әйтеүе арҡаһында бер юлы утыҙға яҡын гестаповсы килеп инә. Баштан-аяҡ ҡоралланған, усал йөҙлө һалдаттарҙы күргәс, бәләкәй ҡыҙҙары ҡысҡырып илап ебәрә һәм Мария Мозолова уға: “Илама, аҡыллым, былар һәйбәт һалдаттар ул, һиңә теймәйҙәр!” — тигәс, һалдаттарҙың йөҙөнә йылмайыу йүгерә. Был юлы ла гестаповсылар ғаилә менән киске аш ашағас, өйҙә йоҡларға ҡала” (“Гиеналар”, 10-сы бит).

Күренеүенсә, урындағы халыҡ Ян Жижка бригадаһына хәленән килгәнсә ярҙам иткән, уға үҙенең ҡотҡарыусыһы тип ҡараған. Гостин тауы янында Славков ауылы тимерсеһенең Божена Микова исемле ҡыҙы, мәҫәлән, бригадаға даими рәүештә ит, икмәк, май, тоҙ, он ташый, “Гошталковҡа тиҙҙән карателдәр облава яһаясаҡ”, — тигән яман хәбәрҙе лә Мурзинға Божена еткерә. Ушияк менән булған хәлдәрҙән һуң Мурзин яңы кешеләрҙе, әлбиттә, ҙур һаҡлыҡ менән ҡабул иткән. Тимерсе ҡыҙын да маңлайына пистолет төбәп ҡаршылай, тик, бәхеткә ҡаршы, ҡыҙҙы Степанов танып ҡала. Тауҙар артылып арыған ҡыҙҙы Степанов яғымлы һөйләшеп, рәхмәттәр әйтеп ҡаршылай, ашатып, ял иттереп оҙата. Божена ярҙам йөҙөнән мең крона аҡса ла ҡалдыра был юлы. Степанов ҙур уңайһыҙлыҡ кисерһә лә, аҡсаны алырға мәжбүр була, сөнки яралыларға медикаменттар, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым һатып алыу өсөн аҡсаға мохтажлыҡ кисерәләр. Унан һуң, барыһы ла Божена кеүек аҡса һуҙып тормай бит!

Ошо фекерҙе йөпләп, элекке партизан Олджих Доментың һуғыштан һуң яҙған иҫтәлектәренән өҙөк килтерәйек: “Беҙ, партизандар, тауҙарҙа ас, бысраҡ йәшәнек, бетләй торғайныҡ. Һәр ваҡыт ҡурҡыу, үлем тураһында уйлау беҙҙе ҡырағайлыҡҡа этәрҙе: бер-беребеҙ менән тиҙ генә дошманлашып, юҡҡа-барға һуғышып-талашып китә торған, ҡыҙыу ҡанлыға әйләндек. Һәм был — тормош дөрөҫлөгө. Ләкин фашистарҙы, һатлыҡ йәндәрҙе барыбыҙ ҙа күрә алманыҡ. Әгәр тыуған йорт, яҡындарыбыҙ, ата-әсәбеҙ, балаларыбыҙ һәм һөйгәндәребеҙҙе уйламаһаҡ, беҙ барыбыҙ ҙа аҡылдан яҙған булыр инек” (Я.Поспишил. “Гиеналар”, 313-сө бит).

## Һуғыш ҡорбанһыҙ булмай, йәки Иван Степанов, Павел Пименов һәм Виктор Грековскийҙың үлеме

Визовицы янындағы һуғышта партизандар ике йөҙҙән ашыу гестаповсыны юҡ итә, тирә-яҡ немец мәйеттәре менән тула. Немецтар ҡаланы ташлап ҡаса һәм юлда Василий Лаврешев отрядына осрай. Улар ҡырҡтан ашыу немецты пленға ала. Тотҡондарҙы һаҡлау өсөн ике ҡораллы партизанды ҡуялар. Ныҡлап тикшермәйҙәр. Бер немецтың итек ҡунысында бысаҡ ҡала. Ғәмһеҙлек быны нимәгә килтерә, ә бит партизанға үтә лә иғтибарлы һәм һаҡ булырға кәрәк! Тентегәндә дошмандың кеҫәләрен генә түгел, итектәрен дә ҡарарға кәрәк булған да бит, юҡ, тикшермәгәндәр. Ә немецтарға шул ғына кәрәк тә! Улар һаҡсыларҙы үлтерә лә, төрлөһө төрлө яҡҡа ҡаса башлай. Бункерҙың тирә-яғы шау-шыу, автоматтар таҡылдауына күмелә. “Был ваҡытта Степанов менән Мурзин бункерҙа була, — тип яҙа Г.Гофман үҙенең “Ҡара генерал” китабында. — Улар: “Ҡыуып етегеҙ, береһен дә ысҡындырмағыҙ!” — тип бойороҡ бирә. Шул атыш ваҡытында Степанов һәләк була ла инде.

Янына Мурзин килеп еткәндә, Степанов ерҙә арҡаһы менән ята. Күҙҙәре шар асыҡ. Күгәргән ирендәре ниҙер әйтергә теләй һымаҡ.

— Иван, туғаным, был ни хәл?

— Бәхил бул, мине онотма! — ти Степанов, ауыҙын саҡ асып. Үҙенең баш күтәрерлек тә хәле юҡ. Ҡиң асылған күҙҙәре бер нөктәгә терәлеп ҡатты" (Г.Гофман. 266-сы бит).

Степановтың үлеме хаҡында Д.Мурзин "Дошман тылындағы фронт" исемле китабында: "Мин Степановты үлтермәнем", — тип яҙған. Ләкин чех әҙәбиәтендә Степановтың үлемендә Мурзинды ғына ғәйепләйҙәр. Һуғыш тамамланғандан һуң иҫән ҡалған партизандарҙан алынған һорауҙар, шаһит партизандарҙың һөйләүҙәре, үкенескә ҡаршы, яҡташыбыҙ файҙаһына түгел.

Ҡомиссар Иван Степанов һуғыш бөтөргә бер ай ғына ҡалғас, 1945 йылдың 10 апрелендә һәләк була. Я.Поспишилдың "Гиеналар" китабында 319-сы биттә был хәл тураһында былай яҙыла: "1945 йылдың мартында 20-се СС дивизияһы һалдаттары Ян Жижка бригадаһын ҡаты эҙәрлекләй ине. Партизандар немецтарға ҡаршы батырҙарса һуғыша. Бер алышта партизандар яғынан да, немецтар яғынан да байтаҡ һалдаттар һәләк була. Партизандар 23 немецты ҡулға ала. Яу тамамланғас, партизандар "байрам" итә. Мурзин пистолетын ала ла немецтарҙы атып үлтерә башлай. Немец һалдаттары ҡасып маташа, тик уларҙы командирҙың пулялары тиҙ ҡыуып етә. Шунда яңылыштан Мурзиндың пуляһы комиссар Степановҡа ла тейә. Ул шунда уҡ йығыла һәм йән бирә. Был турала һуғыштан һуң партизандарға һөйләргә ҡушылмай, ошо бәхетһеҙлектең шаһиты булған бригада докторы Пейше, Ярослав Дурдик "Степановтың үлеме яңылышлыҡ арҡаһында килеп сыҡты", — тигән күрһәтмә бирә.

Һуғыш тамамланыу менән Ян Жижка исемендәге бригада таратыла: барыһы ла ғаиләләренә ашыға. Бригада партизаны Ҡарел Бубеничектың хәтерләүенсә, ул да ҡатыны, балалары янына ашыға, ике йыл күрмәгән бит, нисек түҙәһең! Ҡарелдың Виктор Великовский исемле иптәше лә Бартовце ҡалаһындағы ғаиләһенә ашыға... тик яҡындарын ҡосаҡларға яҙмаған була уға. Был ваҡытта ҡала һаман да немецтар ҡулында булған: Викторҙы немецтар бейек өй түбәһенә ҡуйылған пулеметтан атып үлтерә.

Ҡарел Бубеничек һуғыштан һуң именлек органдарында эшләй. Партизандар хаҡында һөйләүҙән ҡырҡа баш тарта, сөнки һуғыштан һуңғы репрессия йылдарында бригадала һуғышҡан бик күп саф күңелле һәм намыҫлы партизандар төрмәгә ултыртыла. Шундайҙарҙың береһе Джегостице ҡалаһы старостаһы Ярослав Давид — уның исеме тик ҡырҡ йылдан һуң ғына аҡлана, был турала ла Я.Поспишилдың китабында асыҡ әйтелә (319-сы бит).

Хәйер, һуғышта ниҙәр генә булмаҫ! Степанов менән булғанға оҡшаш хәлдәр ҙә осрап торған. Шундай бер фажиғә, мәҫәлән, партизан Сергей Жуков менән дә була. Ауыр походтан һуң Себесуки тигән ауыл ситендәге бер бәләкәй генә өйҙә арыған Сергей йоҡлап китә һәм бишмәтенең эске кеҫәһендәге пистолеты яңылыш иҙәнгә төшөп китеп, егетте үлемесле яралай (Г.Гофман, "Ҡара генерал", 220-се бит).

Ә бына лейтенант Долинов менән булған хәл күпкә ҡатмарлыраҡ. Күрәһең, уның үлеме хаҡында совет осоронда яҙырға ярамағандыр инде. Г.Гофмандың "Ҡара генерал"ында: "Лейтенант Долинов власовсылар менән төнгө алышта һәләк булды. Ул йәшеренеп кенә баракка барып етте һәм унда торған һаҡсыны юҡ итте, беренсе булып хыянатсылар казармаһына барып инде. Ғәйебе өсөн Долинов үҙ ғүмере менән яуап бирҙе, тигән фекергә килде партизандар", — тиелә (243-сө бит). Ә асылда иһә эш икенсерәк була. Элекке партизан Владимир Крайчек былай

тип хәтерләй: “Протекторат етәксеһе Ҡ.Франк Ян Жижка бригадаһын юҡ итеү буйынса төрлө саралар уйлап таба. Ул бригадаға йәшерен исеме Пинкус булған власовсы Просковецты индерә. Гестапола тулы әҙерлек үткән был әҙәм бригадаға 1945 йылдың февраль аҙағында Нечипуренко исеме аҫтында килеп урынлаша һәм Мурзинға яҡын кешеләрҙең береһе — өлкән лейтенант Долиновтың ышанысына инә. Ййлап Долиновты, унан Мурзинды, йәнәһе лә, Лисковицы ҡалаһындағы власовсылар батальоны партизандар яғына сығырға теләй, тип улар менән осрашыуға ризалаштыра. Мурзин власовсылар менән осрашыуҙан ҡырҡа баш тарта, Долинов менән Нечипуренкоға ла лагерҙан ситкә сығыуҙы тыя. Ләкин Долинов рөхсәтһеҙ власовсылар янына китә. Юлда Нечипуренко үҙенекеләр яғына һыпырта, ә Долинов яңғыҙ ҡала. Аптырағас, лагерға ҡайта егет. Мурзин янына алып киләләр. Долинов ишектән ингәс тә, Мурзин уны атып үлтерә. Был ваҡытта Долинов эргәһендә яҡын ғына чех партизандары Франц Моло, Ярослав Осачек һәм өс бер туған Чечектар баҫып торған була. Мурзиндың пулялары Долиновты алып килгән Ладислав Чечек менән Оля Чечковаға ла тейә — улар ике көндән йән бирә. Бригадаға оло хәүеф янауҙан ярһыған Мурзин уларға яңылыш тейҙерә.

Трояктағы партизан штабында булған был трагик хәлгә ҡарата Мурзин ошондай бойороҡ сығара: “Өлкән лейтенант Александр Долинов бригада командованиеһының заданиеһын үтәгәндә ғәфү итмәҫлек хата яһаны, приказды боҙҙо. Уның хатаһы ауыр, ғәфү итмәҫлек һәм бригада составын ауыр эҙемтәләргә килтерҙе һәм, әйтелгәндәрҙән сығып, минең ҡулымдан атылды” (Я.Поспишил, “Гиеналар”, 318-се бит). Күренеүенсә, был юлы ла, тик саҡ ҡына икенсерәк сифатта, Ушияк менән булған кеүек ваҡиғалар ҡабатлана... Эйе, тауҙарҙағы һәр кеше партизан түгел, ышанһаң, яуаплылыҡты үҙеңә алһаң-алмаһаң да, тикшерһәң-тикшермәһәң дә, хаталарҙан берәү ҙә азат түгел. Д.Мурзинды тәнҡитләү, төрлө хаталарҙа ғәйепләү артты. Эшләмәгән кеше генә хаталанмай, кем эшләй — шул хаталана. Яҡташыбыҙ хаҡында яҙған Я.Поспишилды ла тәнҡитләргә ашыҡмайыҡ, сөнки ул архив документтарына нигеҙләнеп эшләй.

Уның китабында шулай уҡ 1944 йылдың 27 октябрендә Всетинда һәләк булған Грековский хаҡында ла әйтелә. Автор Грековскийҙың үлеме сәбәбен Владимир Крейчик исемле икенсе бер партизан төркөмө етәксеһе менән һүҙгә килешеү һөҙөмтәһендә килеп сыҡҡан, ти. Грековский Крейчик отрядының халыҡты талауы, отрядта дисципли-

*Д.Мурзин И.Степановты ерләгәндә һүҙ тота*



на булмауы, партизандарҙың ҡайҙа телəй, шунда сығып китеүен тəнҡитлəй, командирҙы партизан исеменə тап төшөрөүҙə, партизандарҙың халыҡ алдындағы абруйын кəметеүҙə ғəйеплəй. Улар талашып китə һəм ҡыҙыу ҡанлы Крейчик Грековский менəн уны яҡлаған Пименовты атып үлтерə.

Ушияк, Долинов, Степанов, Грековский, Пименов менəн булған хəлдəрҙəн һуң Мурзин бригадала үҙгəрештəр индерергə мəжбүр була. Грековский урынына лейтенант Москаленко тəғəйенлəнə, ə отряд менəн “Стажик” (“Ҡарт”) ҡушаматлы Йозеф Вавра исемле чех етəкселек итə. “Берды-Права” тигəн яңы төркөм ойошторола, уға командир итеп Чехословакия граждандар авиацияһының элекке пилоты Франтишка Фоукал тəғəйенлəнə. Тик немецтарҙан ғына торған айырым бер төркөм менəн кесе лейтенант Зимин етəкселек итə. Иван Степанов менəн кəңəшлəшкəндəн һуң отрядтарҙы батальон тип атайҙар, һəр батальондың хəрəкəт итеү районлары, анығ заданиелары, штабы, командиры, комиссары билдəлəнə. Мурзин Степановҡа үҙенең беренсе урынбаҫары урынын тəҡдим итһə лə, Степанов ризалашмай. Ул үҙ бригадаһында комиссар булып ҡала, уның батальоны Всетин, Валахска Мезирича окрестында хəрəкəт итə. Бригада штабы начальнигы итеп лейтенант Василий Настенко ҡуйыла. Артабан Злин, Визовицы, Велики Ҡарловицы райондарында хəрəкəт итəсəк беренсе батальон командиры итеп лейтенант Будько раҫлана. Градище, Напаедла, Всетин районында — Йозеф Вавра; Прага, Плзень, Рокицаны ҡалалары тирəһендə урынлашҡан дүртенсе батальонға Франтишка Фоукал тəғəйенлəнə. Быларҙан тыш, Петр Москаленко, Честмир Подземный командалыҡ иткəн айырым ике отряд барлыҡҡа килə (Г.Гофман. “Ҡара генерал”, 181-се бит).

## Һатлыҡ йəндəр үҙгəрмəй: Фоукал — Мурзиндың иң ҙур хатаһы

Һуғыштан һуң Чехословакияла Мурзин һəм ул командалыҡ иткəн бригада хаҡында күп һандағы китаптар, очерктар, хатта диссертациялар яҙылған. Яҡташыбыҙ Европа, донъя кимəлендəге легендар шəхес булһа ла, беҙ Башҡортостанда ундай кимəлдə һаман эшлəй алмайбыҙ əле.

Чехословакияла һуғыш тамамланғас, алдағы тормоштарын уйлап карьера яһарға ынтылыусылар тап Мурзинға мөрəжəғəт иткəн һəм, ысынлап та, яңылышмаған. Бригадала һуғышҡан бик күп чехтар һəм словактар һуңынан етəксе органдарға үрлəтелгəн. Лəкин улар араһында ла төрлөһө булған. Шуларҙың береһе — Мурзин исеме менəн һатыу итеп, ел ҡайһы яҡҡа иҫһə, шунда ауған Франтишка Фоукал.

Я.Поспишилдың “Франтишка Фоукал менəн булған хəл” мəҡəлəһенəн ошондай юлдар килтерəм (“Гиеналар”, 352—401-се биттəр): “Фоукал Мартин ҡалаһында 1917 йылдың 29 июлендə Игнаций менəн Филиппина Фоукалдарҙың хəлле ғаилəһендə тыуа, 1936 йылда данлыҡлы аяҡ кейемдəре тегеү концерны “Батя”ла пилот булып эшлəй. Лəкин тырышлығы менəн түгел, ə ҡанһыҙлығы, хəйлəкəрлеге менəн башҡаларҙан айырылып тора. Уның менəн аралашҡан пилот Йозеф Штастный былай тип хəтерлəй: “Франтишка насар холоҡло, ялағай, тəнҡитте яратмай, ярамһаҡ əҙəм, коллективта уны бер ваҡытта ла яратманылар, ихтирам итмəнелəр. Франтишка башҡалар өсөн бер нəмə лə эшлəмəне, лəкин башҡаларҙың хеҙмəте, уңышы менəн файҙаланырға, унан бик оҫта итеп үҙ файҙаһына аҡса, дан сығарырға ратты, гел рəхəт йəшəргə ынтылды. 1938 йылда Фоукалды насар хеҙмəте өсөн эштəн ебəрҙелəр”.

Ләкин Фоукал аптырап ҡалмай, Прагала йәшәгән Зденце исемле апаһына барып, уның иҫәбенә кейенеп ала ла, инглиз теле курстарына йөрөй башлай. Маҡсаты — Грбачек, Краус исемле ике пилот менән Англияға һыпыртыу була, ләкин ни сәбәптәндер тегеләр юҡ булғас, бәлки, уларҙы гестапо ҡулға алғандыр, тип артабан курстарға йөрөмәй. 1940 йылда немецтар Чехословакия пилоттарын, аэродромдарҙы тикшерә башлай, хатта йәшерен ойошмаға берләшкән бер төркөмдө асалар. Шунда Фоукал немецтарға ҡаршы йәшерен эш алып барыусы Самуил Крейчи, Леопольд Ижиднечик, Ладислав Швад, Ярослав Свобода, Ян Лонек һ.б. летчиктарҙы гестапоға һата.

Фоукал осрашыу өсөн бай бисәләр эҙләй һәм эҙләгәнен таба: оҙон буйлы, мөләйем йөҙлө, дәрте ташып торған, зәңгәр күҙле Фоукалды ҡунаҡханалар, ресторандар тотҡан Милослав Папежиков тигән байҙың ҡыҙы Мария оҡшата. 1941 йылда улар никахҡа инә" (Я.Поспишил. "Гиеналар", 356-сы бит). Папежиковтар Фоукалдың ҡара эсле булыуын белмәй, аҙаҡ һуң була инде. Фоукал иһә тормошон финанс яғынан нығытып алғас, 1943 йылда гестапо конфидентына әйләнә. Үҙ халҡының күп яҡшы улдарын, ҡыҙҙарын һатҡан кешенең гестаповсылар менән көлә-көлә әңгәмәләшеүен, гестапо кейемендә улар менән машинала елдереүҙәрен бик күптәр күрә. Шуларҙың береһе — паровоз машинисы Вацлав Кгаин ошондай күрһәтмә биргән: "Мин Фоукалды күп тапҡырҙар гестапо формаһында күрҙем". Фриштак ҡалаһынан Милан Махачка ла — Фоукалды гестапо кейемендә күп тапҡырҙар күргән шаһит.

Фоукал һуғыштан һуң Д.Мурзинды эҙләп таба һәм үҙенә бик шәп характеристика яҙҙырып ала. Һуңынан ошо характеристика ярҙамында ул ҙур етәксе вазифаларында эшләй. Ҡайҙа барһа ла, иң тәүҙә ошо характеристиканы күрһәтә, "Мин Даян Мурзин менән Ян Жижка бригадаһында бергә һуғыштым", — тип маҡтана. Д.Мурзин Чехословакияла һуғыштан һуң егерме ике тапҡыр булған. Ғәҙәттә, ул элекке яуҙаштары менән бергә осраша, улар менән студенттар, эшселәр алдында сығыш яһай. Фоукал үҙен бындай осрашыуҙарҙа халыҡ батыры Даян Мурзин менән типә-тиң тотҡан, хатта бергәләп фотоға ла төшкәндәр.

Һуғыштан һуң Фоукалдың гестапола хеҙмәт иткәнен асыҡлайҙар, хатта дүрт йыл ярымға иректән мәхрүм итергә тигән суд ҡарары ла сығарыла, ләкин ни сәбәптәндер ул үтәлмәй. Фоукал төрлө хәйләләр менән ирektә ҡала һәм элеккесә етәксе органдарҙа эшләүен, халыҡ алдында герой-партизан булараҡ сығыш яһауын дауам итә. Әле беҙ ҡайһы бер һатлыҡ йәндәрҙең һуғыштан һуң нисек йәшәүҙәрен күрһәткән бер миҫалды ғына ҡараныҡ, ә улар бит күп булған! Бында, минең уйымса, берҙән, ҡатнаш ғаиләләрҙә тыуып үҫеп, йә немец, йә чех, йәки словак булып, ике яҡҡа ла бөгөлгән кешеләр психологияһы сағылһа, икенсенән, ниндәй генә ауыр ситуациялар килеп сыҡмаһын, һыуҙан ҡоро сыға белгән ошондай әҙәмдәр тыныс тормошта ла барыбер үҙ асылына тоғро ҡалған. Йылан үҙе үлһә лә, ағыуы тешендә ҡала, тиҙәр бит. Был осраҡта иһә Фоукалдың гестапо офицеры тәжрибәһен дә иҫәпкә алырға кәрәк.

Партизандар тормошон тәрәнерәк аңлау өсөн башҡа миҫалдарға иғтибар итәйек. Мәҫәлән, нацист төрмәләрендә ултырған, Д.Мурзин, Я.Ушияк, И.Степанов менән шәхсән таныш булған Инджишка Наврлантованың иҫтәлектәрендә партизандар тураһында ошолай әйтелә: "Мин 1929 йылдың 28 октябрендә Голштин тауҙары араһында ултырған Райнховицы ауылында ябай ғаиләлә тыуғанмын. Бәләкәй генә булһа ла, еребеҙ бар ине, шуны эшкәртеп, иген сәсеп, ейләк-емеш, йәшелсә үҫтереп көн күрҙек. Радио, электр уты булманы,

барыһын да ҡул көсө менән башҡарҙыҡ. Атайым урман ҡараусы булып эшләне. Күршеләр беҙҙән алыҫ йәшәһә лә, аралаша торғайныҡ. Совет партизандарына, 1944 йылда улар Склабинола парашютта төшкәс, 1945 йылдың 9 майына тиклем ярҙам иттек. Һиҙҙеләр. Гестапо мине лә, атай-әсәйемде лә 1945 йылдың 8 февралендә төрмәгә ултыртты. Унан һуғыш бөткәс кенә сыҡтыҡ.

Партизандар менән беренсе осрашыуыбыҙ былай булды. Бер көндө беҙгә күрше малайы, класташым Франтик килде, ата-әсәһен гестапо алып киткәнен әйтте. Беҙ парашютистарҙың килеүенән дә ҡурҡа торғайныҡ: гестапо белеп ҡалһа, барыбыҙҙы ла атасаҡтар бит!

Тәүләп беҙгә Иван менән Николай — концлагерҙан ҡасҡан тотҡондар килде. Улар ҙа үҙҙәрен партизан тип таныҡтайны. Атайымдан тартырға тәмәке, эсергә араҡы һоранылар. Юҡ, тигәс, пистолеттарын сығарып, атайымдың күкрәгенә терәнеләр. Шунда мин: “Атайым тартмай, беҙҙә тәмәке булғаны юҡ!” — тип ҡурҡышымдан ҡысҡырып ебәргәс, теймәнеләр.

Икенсе ваҡыт беҙгә үҙен Месяцев тип таныҡҡан икенсе берәү килде лә йоҡларға ҡалдырыуҙы үтенде. Тик атайым, гестапо белеп ҡалыр, тип ризалашманы. Беҙ һуғыш тамамланғансы бер генә төндө лә тыныс үткәрмәнек, бер төндә лә тыныс йоҡламаныҡ. Беҙгә һәр төн тәҙрә ҡаҡтылар...

Ә бына үҙен Иван Степанов тип таныҡҡан совет партизанын бер күреүҙә оҡшаттыҡ, ул һары сәсле, матур йөҙлө, асыҡ күңелле кеше булып хәтерҙә уйылып ҡалған. Аҙаҡтан ғына уның Ян Жижка бригадаһы комиссары икәнлеген белдек.

1944 йылда беҙҙә өс тапҡыр Даян Мурзин үҙе булды. Бер килгәнендә ул беҙҙән сусҡа һораны. Шул көндө беҙгә атайымдың ағаһы килгәйне, ул атайыма: “Әгәр сусҡаңды бирһәң, немецтар иртәгә килеп һанаясаҡтар ҙа, үҙеңде атып китәсәктәр. Бер баш сусҡаңдың юғалғанын нисек аңлатырһың?” — тине. Был һөйләшеүҙе ишеткән Мурзин атайымдың ағаһын атып китә. Мурзин ауыл халҡына: “Беҙ һуғышабыҙ, ә һеҙ беҙгә ярҙам итергә теләмәйһегеҙ. Әллә беҙгә ҡаршы һуғышырға теләйһегеҙме?” — тип сығыш яһаны. Был хәлде мин әле лә онота алмайым.

Ул йылдарҙа беҙҙе тегеләре лә, былары ла килеп талай торғайны. 1945 йылдың яҙында беҙҙең өйгә яҡын ғына ерҙә немецтар менән партизандар араһында атыш китте. Пулялар һыҙғырып оса, беҙгә нисек теймәгәндер. Беҙ, балалар, подвалға ҡастыҡ. Унан сыҡҡас, бер партизандың янып үлгәнен, Борис исемле партизанды һәм өс күршебеҙҙе атып киткәндәрен белдек. Атайым иһә урманға ҡасып ҡотолған. Гестаповсылар халыҡтың йорт-еренә ут төрткән — быны улар партизандарға ярҙам иткәнебеҙ өсөн эшләгән. Миңә ул саҡта 15 йәш ине, әсәйем менән икебеҙҙе төрмәгә ултырттылар. Беҙҙе ай буйына: “Партизандар ҡайҙа, кемде беләһегеҙ, Мурзин килә инеме?” — тип көн һайын туҡманылар, тик барыбер өндәшмәнек. Атайымды ла ҡулға алғандар икән, уны осратманыҡ. Һуғыш бөткәс, әсәйем менән тыуған ауылыбыҙға ҡайттыҡ. Әсәйемдең ситкә киткеһе килмәне. Степанов тураһында һорашҡас, ул: “Мурзин Степановты атып үлтергән”, — тине. Мурзин менән беҙ башҡаса осрашманыҡ.

1952 йылда беҙ коммунистик режимға ҡаршы сыҡтыҡ, сөнки колхозлашырға теләмәнек. Совет закондары беҙҙең өсөн ят булды, шул сәбәпле 1954 йылда мине төрмәгә ултырттылар. Был юлы үҙебеҙҙекеләр япты. 1963 йылдың 20 февралендә генә сыҡтым” (“Гиеналар”, “Тарихи акциялар” бүлеге).

Степановтың үлеме тураһында журналист Ярослав Даниэль былай тип яҙа: “1944 йылдың ноябренә Ян Жижка бригадаһында өс меңләп кеше иҫәпләнә, ә

был ҙур көс, һәм, күрәһең, командирға етәкселек итеүе еңел булмағандыр. Степанов 1945 йылдың 10 апрелендә һәләк була. Партизандар араһында "Степановты Мурзин үлтергән" тигән хәбәр йөрөнө, тик был турала ҡысҡырып әйтмәнеләр. Мурзин иһә: "Степановты немецтар атып үлтерҙе, мин Степановты үлтермәнем", — тигән. Мурзин партизандарының барыһы ла уның ҡаты ҡуллы командир булыуын кире ҡаҡмай, сөнки ул ваҡытта шунһыҙ мөмкин булмаған".

## Урмансы Методий Гиянканың мурзинсыларға юл күрһәткәне...

"Ян Жижка бригадаһы хаотик рәүештә хәрәкәт иткән, бригадаға күберәк йәш егеттәрҙе алғандар, шуға һуғышҡа өйрәтелмәгән йәштәр күпләп ҡырылған, — тип яҙа Я.Поспишил. — Һуғыштан һуң Мурзинды Чехословакияла изгеләштереп ебәрҙеләр, хаталарына күҙ йомдолар. Һуғыш тамамланғас, булып үткән хәлваҡиғаларҙы асыҡлау, анализлау, ғәҙеллекте юллау башланғайны. Мурзин Степановтың ғына түгел, Долиновтың, Ладислав Чечектың үлемендә лә ғәйепле, ул бик күптәрҙе тикшереүһеҙ-ниһеҙ үлем язаһына тарттырған" (125-се бит).

1944—1945 йылдарҙа Држков, Русава үҙәнендә ғаиләһендә өс ҡыҙ тәрбиәләнгән 38 йәшлек урмансы Методий Гиянка ла Мурзин арҡаһында һәләк була. Методий партизандарға даими ярҙам итеп торған кеше булған, яралы партизандарҙы дауалаған. 1944 йылдың ноябрендә гестаповсылар уның өйөнә килә һәм тауҙарҙа юл күрһәтеп барыуын талап итә. Методий немецтарға ла, партизандарға ла юл күрһәткән, сөнки тегеләренең дә, быларының да үлтереп китеүенән ҡурҡҡан.

Немецтарға юл күрһәткәндән һуң Гиянка ҡурҡып йәшәй. Атаһының үлеме тураһында уның ҡыҙы Анна Викопалова-Гиянкова һуғыштан һуң ошолай хәтерләй: "Атайым немецтарға юл күрһәткәндән һуң бер нисә көн үткәс, киске алтылар тирәһендә беҙгә Мурзин менән тағы ла алты партизан килеп инде. Улар атайымды башта бик ҡаты туҡманылар, немецтарға һатылыуҙа ғәйепләнеләр. Башын стенаға бәреп-бәреп туҡмағас, атайымдың танауынан, ауыҙынан ҡан китте. Беҙҙе, балаларҙы, атайыбыҙҙы туҡмағанды күрмәҫ өсөн, кухняға ҡыуып сығарҙылар һәм был турала бер кемгә лә, бер ерҙә лә һөйләргә ярамай, тип иҫкәрттеләр. Һораһалар, йығылып, башын ташҡа бәргән, тип әйтергә ҡуштылар. Улар киткәс, иҙәндә ҡанға батып ятҡан атайымды больницаға алып барһаҡ та, мандый алманы. Мейеһенә ҡан һауған булған. Беҙ, өс ҡыҙ бала, бына шулай атайһыҙ ҡалдыҡ...

Атайымды туҡмағандан һуң партизандар өйөбөҙҙө тентене, алтын әйберҙәрҙе, кейем-һалымды, ике күн сумканы үҙҙәре менән алып киттеләр. Был хәлдән һуң ауылдаштар беҙгә "һатлыҡ йән" тигән исем таҡты. Тик 1947 йылда суд-экспертиза тикшереүе үткәрелгәндән һуң ғына атайымды аҡланылар. Адвокатыбыҙ Голешов исемле юрист ине" (126-сы бит).

Бына тағы ла бер миҫал. "Бер ваҡыт урмансы Антонин Неволови Ян исемле улы менән урманға сығып китә. Өйҙә Людмила исемле бик сибәр ҡыҙы ҡала. Ә Людмиланы Францишка Викторин тигән һунарсы егет яратып йөрөй. Ҡыҙҙың атаһы урманға сығып киткәнен күреп тә ҡала ла, килеп тә инә. Күп тә үтмәй, быларға ат менән сана һорап ике гестапо һалдаты ла килә. Людмила ул ваҡытта өҫтәлгә аш ултыртып йөрөй, ә кухняла Мурзин ултырған була. Мурзин немецтарҙы күреү менән уларға автоматтан ата башлай, ҡуша өйҙәгеләрҙең ҡалғандарын да атып үлтерә.

Ошо уҡ йылдың 16 апрелендә Бескид тауҙарында чех партизандары Францишка Палах һәм Леопольд Мисниковиан атып үлтерелә, уларҙы иһә Ян Жижка бригадаһы командиры Мурзин Англиянан килгән "Вольфрам" төркөмөнә ярҙам

итеүҙә ғәйепләй. Уйлаһаң, әлбиттә, инглиздәр ҙә фашизмға ҡаршы һуғышҡан, ҡайҙа ғәҙеллек, ҡайҙа ғәҙелһеҙлек, аңлауы-аңлатыуы хәҙер ҙә еңел түгел.

Валахска Мезиречалағы һуғыш тамамланыр алдынан тағы ла ике партизан үлем язаһына тарттырыла: һуғыштан ҡасып йөрөгән һәм отрядҡа килеп юлыҡҡан өс немец һалдаты менән бергә Властилин Демел, Ян Грабовский исемле ике чех язалап үлтерелә — был язалар ҙа Ян Жижка бригадаһы командиры Мурзиндың ҡарары менән үтәлгән" (Я.Поспишил. "Гиеналар", 115—117-се биттәр).

## "Литбратр"клубы ғәҙеллек юллай

Д.Мурзин элекке Чехословакияла, үҙе әйтеүе буйынса, егерме ике тапҡыр булған, тигәйнек. Ғәҙәттә 9 Май байрамында партизан дуҫтары менән осрашҡандан һуң ул, ошо илдең милли геройы булараҡ, элиталы Ҡарловы Вары курортында дауаланған, ял иткән. Ошо ҡалала бригада партизандары "Литбратр" ветерандар клубын ойоштора. 1996 йылда Я.Поспишилдың "Гиеналар" китабы донъя күргәс, яугирҙар авторға ҡаршы кампания башлай: уны партизандар тормошон ғәҙел һүрәтләмәүҙә, уларҙың исемен бысратыуҙа ғәйепләйҙәр һәм судҡа бирәләр. Телевидение, радио аша ла сығыш яһап, гәзиттәрҙә яҙып сығалар. Улар Поспишилды партизан һуғышы ваҡиғаларын боҙоп күрһәтеүҙә ғәйепләп, "Халыҡты фашизмдан ҡотҡарыусылар" (1998), "Гиеналар" нисек яҙылған? " (1997), "Дөрөҫлөк һәм үлем хаҡындағы китап" (1994), "Хөрмәтле яугирҙар даулаша" (1998), "Партизан һуғышын кәмһетеп күрһәтеү" (1997), "Гиеналар акцияла" бүлегендә партизан һуғышы боҙоп күрһәтелә" (2004) тигән мәҡәләләр баҫтыра.

Судта китабын документтарға таянып яҙған Я.Поспишил ҡайһы бер яңы асылған факттар менән ризалаша. Әҙипкә партизандар һуғышы буйынса консультант, тарихсы Иржи Пернес ярҙам итә, судта яҡлап сығыш яһай. Һуңынан, ҡайһы бер етешһеҙлектәре булһа ла, чех кинорежиссерҙары "Гиеналар" исемле кинофильм (2003) төшөрә. Был фильмды минең үҙемә лә бер нисә тапҡыр ҡарарға насип булды. Унда, ысынлап та, "литбратрсылар" ғәҙел тип тапмаған моменттар урын алған: фильмда Ян Жижка бригадаһы партизандары, айырыуса совет граждандары, әхлаҡи яҡтан тотанаҡһыҙ, әрһеҙ, халыҡты ҡурҡытып, талап тороусы, немецтар менән һуғышмай, күберәк үҙ-ара бәрелешеүсе, тәрбиәһеҙ, ҡатын-ҡыҙҙарҙы көсләүсе бандиттар булараҡ һүрәтләнә һәм күңелдә йәмһеҙ тойғолар ҡалдыра. Алда әйтеп киткәнемсә, быларҙың барыһы ла социализм тарҡалғандан һуң сәйәсәт үҙгәреү сәбәпле, үҙҙәрен фашизмдан ҡотҡарыусы СССР-ға ҡарата кире мөнәсәбәт тәрбиәләү, Бөйөк Еңеүҙең бәҫен, әһәмиәтен, Европа халыҡтарының азатлығы өсөн һуғышҡан совет яугирҙарының ролен инҡар итеп, оккупант рәүешендә һүрәтләргә ынтылыуҙан киләлер. Әлбиттә, фильмды ҡарағанда күңелде иң ныҡ ҡырғаны — чехтарҙа "совет партизандары бына шундай булған икән" тигән хата фекер уяныуындалыр.

Партизан һуғышын һүрәтләгән тағы ла бер әҫәр — Ладислав Мначектың "Үлем "Энгельхен" тип атала" китабы буйынса төшөрөлгән фильм. Был таҫма бөгөн Чехияла партизан һуғышын иң дөрөҫ һүрәтләгән кинофильм тип иҫәпләнә. Ян Жижка бригадаһында Д.Мурзин менән иңгә-иң терәп һуғышҡан элекке партизан ундағы ваҡиғаларҙы үҙ йөрәге аша үткәреп, һыҙланып яҙған. Китап төрлө йылдарҙа төрлө телдәргә тәржемә ителгән һәм бөгөн дә һуғыш темаһына арналған иң уҡымлы, иң ҡыҙыҡһындырғыс әҫәрҙәрҙең береһе иҫәпләнә.

## Эшләмәгән кеше генә хataланмай

Д.Мурзин да хаталарҙан азат булмаған, әлбиттә. Ҡаһарманыбыҙ ҡәҙимге, ябай кеше. Ләкин, Көнбайыш әҙәбиәтенән айырмалы рәүештә, Д.Мурзин һәм ул командалыҡ иткән Ян Жижка исемендәге бригада башҡорт һәм Рәсәй әҙәбиәтендә әһәмиәтле күренеш буларaҡ бөтөнләй асылмаған. Уны асыу, халыҡҡа һөйләү, аңлатыуҙы киләсәккә ҡалдырайыҡ, сөнки яҡташыбыҙ шәхесенә ҡағылған әллә күпме нәмәләр әле һаман асыҡланмаған. Бына бер миҫал: Д.Мурзиндың Чехословакияла нисә ҡала геройы булыуы тураһында ла төрлө һандар яҙыла. Г.Гофмандың “Ҡара генерал”ында (269-сы бит) 18 һаны күрһәтелә, интернетта 16-нан уҙҙырмайҙар, унда, ғөмүмән, хаталар бик күп. Чехтар, словактар иһә 18, ти. Тимәк, хәҙергә ошо 18 һанын дөрөҫ тип иҫәпләргә кәрәк.

Д.Мурзин Чехиялағы немецтар өсөн “немец халҡының палачы” булып йөрөһә, чехтарҙа — Халыҡ Геройы, ә беҙҙә кем?

Бөгөн сит илдә генә түгел, хатта Өфөлә лә Ян Жижка бригадаһы һәм Д.Мурзин хаҡында йәштәр бөтөнләй хәбәрҙар түгел, был факт та уйландырырға тейеш.

Д.Мурзиндың наградалары буйынса ла Өфөлә бәхәстәр сығып тора. Әлегә шуны әйтә алам: Көнбайыш әҙәбиәтендә Д.Мурзин наградаларын ғәҙел алмаған, тигән яҙмаларҙы әлегә осратҡаным юҡ. Европа халҡы көнө-төнө ғәҙеллек, дөрөҫлөк өсөн көрәшә, унда нигеҙһеҙ рәүештә халыҡ рәхмәтен, дәүләт наградаларын яулап булмай. Минеңсә, әгәр Мурзин наградаларын ғәҙел алмаһа, был хаҡта күптән яҙып сығырҙар, донъяға яр һалырҙар ине — был Европаға хас күренеш.

Чехословакияның Беренсе дәрәжә Хәрби тәре орденын Мурзин Моравия сигендәге уңышлы партизан хәрәкәте өсөн ала. Ушияк һәләк булыу менән тиҙ арала Киевтан “Бригада менән етәкселек итеү Мурзинға тапшырыла” һәм “Бригадала нисә кеше булыуын, үткән айҙағы эштәр тураһында хәбәр итергә” тигән бойороҡ килеп тә төшә (Г.Гофман, “Ҡара генерал”, 152, 178—181-се биттәр). Ә бригаданың эшләнгән эштәре байтаҡ була был саҡта: 1944 йылдың декабрендә Валах Мезиречаһының Лешна ауылына яҡын урында боеприпастар тейәлгән хәрби эшелон шартлатыла, 17 вагон ҡолатыла. Операция менән лейтенант Долинов етәкселек итә. 4 декабрҙә Йозеф Вавра етәкселегендәге төркөм Карловицы ауылында немецтар яғында һуғышыусы бер взвод венгр һалдаттарын ҡоралһыҙландыра; бишенсе декабрҙә Гончарец төркөмө Яблунка—Валах Мезиречаһы юлында бензин тейәлгән составты шартлата, 20 цистерналағы яғыулыҡ яндырыла; Яворин тауында 15 гестаповсы үлтерелә, 20-һе яралана; Ян Улегла төркөмө Всетин — Яблунка районында боеприпастар тейәлгән тағы ла бер эшелонды шартлата, һөҙөмтәлә, 16 вагон емерелә, партизандар унда күп кенә ҡорал эләктерә; Преров ҡалаһы эргәһендә хәрби техника тейәлгән тағы ла бер эшелон шартлатыла, быны Москаленко отрядына ҡараған Карел Бартонек төркөмө башҡарып сыға. Оҙаҡламай партизандар йөк автомашиналары тейәлгән 14 вагонды ҡыйрата, немецтарҙың 18 һалдатын үлтерә, 50 кешеһен яралай. Всетиндағы һыу башняһын да шартлаталар. Моравия тимер юлында ике туннель, бер күпер шартлатыла, 4 хәрби эшелон юҡ ителә.

Һуғыштың үҙ законы: йә еңәһең, йә еңеләһең, хаталарға урын юҡ. Шуларҙы уйлаһаң, яҡташыбыҙҙы ғәйепләргә тел бармай.

Заман башҡа, заң башҡа. Һәр замандың үҙ геройҙары һәм үҙ батшалары, тигәндәй, совет осоронда Д.Мурзин тураһында дөрөҫөн яҙырға рөхсәт ителмәне, партизандар һуғышы хаҡындағы дөрөҫлөк ярты быуат ваҡыт үткәс кенә ҡалҡып сығып килә.

## Әҙәбиәт

1. *Д.Мурзин*. “Дошман тылындағы фронт”. Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 2005.
2. *Д.Мурзин*. “Новая встреча на Дунае — мост в будущее”. “Ватандаш”, №5, 2005.
3. *Нәжиб Асанбай*. “Ҡара генерал”. “Ҡыҙыл таң”, 1996 йыл, 19 ғинуар һаны.
4. *Генрих Гофман*. “Ҡара генерал”. Өфө, “Китап”, 1993.
5. *Ризван Хажиев*. “Помнят высокие Татры”. “Ватандаш”, №5, 2005.
6. *Зәйни Рафиҡов*. “Личный враг Адольфа Гитлера”. “Ватандаш” №2, 2003.
7. *Миләүшә Ҡолмөхәмәтова*. “Чего заслуживает “Черный генерал?”. “Ватандаш”, №5, 2014.
8. Отечественная история XX — начала XXI века. Москва, “Просвещение”, 2004 (Под редакцией А.О.Чубарьяна).
9. “Освобождение”. Издательство “Прогресс”, 1974 г.

## Сит ил әҙәбиәте

1. *Ладислав Мачка*. “Смерть зовется “Энгельхен” (“Ангелочек”)...
2. *Роман Цилек*. “На право жизни”...
3. *Ярослав Поспишил*. “Гиены”. Визовицы, 1996.
4. *Ярослав Поспишил*. “Гиены”. Визовицы, 2003.
5. *К.Рихтер*. “Апокалипсис в Карпатах”. Прага, 2003.
6. *Карл Рихтер*. Киев — Дукла — Прага.
7. *Карл Рихтер*. Судеты. Прага, 1994.
8. *Карл Рихтер, Петрас С*. “Танки мира в Остраве”, Прага, 1979.
9. *Рих-Тима М*. “Воспоминания партизана партизанской бригады имени Яна Жижки”. Градец-Кралов, 1986.
10. *Владислав Пшикрыл*. “Покрачуйте в горах”. Прага, 1947.
11. *Людвиг Свобода*. “От Бузулука до Праги”. Прага, 1986.
12. *Людвиг Свобода*. “Дорогой жизни”. Прага, 1972.
13. *Честмир Подземный*. “На гору падает ночь”...
14. *К.Рихтер*. “Завоевали Отечество”, часть 1. “Освобождение Чехословакии”, “Документы военно-исторического архива 1994—1945 годов”. Прага, 2005.
15. История Чехословакии с древнейших времен до наших дней. Под редакцией академика Д.Ф.Маркова. Главы “Годы социальных и политических потрясений”, “За национальное освобождение, за новую республику”. Москва, “Наука”, 1998.
16. *А.Холин*. “Страницы летописи Донецкого коксохимического”. Москва, 2003.
17. *Д.Д.Елин*. “Партизаны Молдавии”. Издательство “Картя Молдовеняска”, 1954.
18. “Слоуп в Моравском красу”. Слоуп, 2001.
19. “Русские и Моравия”. Брно, 2011.
20. *Владимир Годбодь*. “Из жизни офицера” (мемуары). Брно, 2003.
21. “Людвиг Свобода”. Журнал “Патек. Лидовы новины”, №4, 2013.
22. *Ростислав Макулик*. “Кого бил “Черный генерал?”. MF “Днеска”, 5 мая, 2012 г.
23. “Война на фотографиях” (Репортаж с Отечественной войны России). Одеон, 1975.